ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21-27 сентябрь (нарысай) 2019

№38 (872)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Йылҡысылыҡта көслөбөҙ



4

Әсәй булып эшләйем...



7

Ирҙәр ир булып ҡалһын,

йәки Улымдың һорауҙарына яуаптар



8

Үлән сәйе булғанда...

ҡара сәйҙе ситкә ҡуйырға ла була



12-13

ТВ-программа 14

***Иғтибар! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ әлеге ваҡытта 2020 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 676 һум 02 тингә яҙыла ала. Гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән кемдәрҙеңдер матур китаптар менән бүләкләнеү ихтималлығы тураһында ла иҫкәртеп ҡуябыҙ. Гәзиткә яҙылыу тураһындағы мәғлүмәтте таныштарығыҙға, әйләнә-тирәләгеләрегеҙгә лә еткерһәгеҙ ине.***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!*

# НИҢӘ КИТӘЛӘР...

## тыуған ерҙәрҙе ташлап?

Мине борсоған иң ҙур проблема бөгөн дөйөм халыҡ бәләһенә әүерелде. Был проблема тураһында асыҡтан-асыҡ 2010 йылдан алып һөйләйбеҙ, әммә ваҡыт үтеү менән ул киңерәк тарала бара. Һүҙ халыҡтың Башҡортостан Республикаһы сиктәренән күпләп күсеп китеүе тураһында бара. Миграцияның реаль масштабын һәм күләмен тулыһынса рәсми үлсәмәгән осраҡта ла, статистика хәүефле һәм ҡыҙғаныс. Уны яңыртыу ниәтендә быйылғы йәй башында республиканың Баймаҡ, Белорет, Мәләүез һәм Миәкә районларында (уларҙың өсәүһе - башҡорттар, береһе төрлө милләт вәкилдәре йәшәгән төбәк), осраҡлы рәүештә һайланған ауылдарҙа өй буйлап йөрөп сыҡтыҡ. Һөҙөмтәләр беҙ көткәнсә булды, шулай ҙа кире һәм яңы факттар башҡорт халҡының миграция тенденцияһы үҫә барыуын күрһәтте. Беҙ тикшереү үткәргән ауылдарҙа хеҙмәткә яраҡлы халыҡтың яртыһына тиклеме ситкә сығып киткән йәки вахта менән эшләп йөрөй. Улар араһында 35 йәшкә тиклемге эшкә яраҡлы, репродуктив йәштәгеләр бигерәк күп. Быға айырыуса баҫым яһала, сөнки һуңғы йылдарҙа тыуым кәмеүен дә күҙәтәбеҙ. Төрлө сәбәптәр күп, шул иҫәптән тәбиғи-демографик, әммә был проблемаға йәш быуын миграцияһы ла һиҙелерлек өлөшөн индерә. Йәштәрҙең уҡыу һәм хеҙмәт миграцияларының быға тиклем булған Себер, Мәскәү, Питер йүнәлештәренә көньяҡ һәм Ҡаҙан миграция векторҙары өҫтәлде. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың уҡырға һәм эшкә сығып китеү осрағы ир-егеттәрҙекенә тиңләшеүе, урыны менән хатта артып та китеүе хәлдең милли афәт кимәленә күтәрелеүен дәлилләй.

Ҡыҙғанысҡа күрә, былар барыһы ла дөрөҫләнгән факттар. Хәлде төҙәтеү өсөн ни эшләргә, ниндәй саралар күрергә? Ғәйеплеләрҙе эҙләү яҡшы эш түгел. Беҙҙе лайыҡлы хеҙмәт һәм тейешле эш хаҡы менән тәьмин итә алмаған дәүләт ғәйепле булыуы көн кеүек асыҡ. Барлыҡҡа килгән, дөрөҫөрәге, тарҡалған йәмәғәт производствоһы, коллектив хеҙмәт системалары һ.б. ғәйепле. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы сит ҡала һәм илдәргә аҡса табырға сығып китергә рөхсәт итеүсе, хатта мәжбүрләүсе ир-егеттәр - беҙ ҙә ғәйепле. Әммә шуныһы ла мәғлүм: быға тиклем күреп белмәгән ошо бәләнән ҡотолоу буйынса халыҡтың бөтә көстәрен һәм төбәк власть мөмкинлектәрен бергә туплап алыу кәрәк беҙгә.

**(Дауамы 3-сө биттә).**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# ДУҪЛЫҒЫБЫҘҒА ШАТМЫН

**Гәзиттәрҙе өлкәндәр генә уҡый тип уйлайҙыр күптәр. Был дөрөҫ түгел. Мин әлеге мәлдә мәктәп уҡыусыһы. Бәләкәйҙән "Аҡбуҙат", "Йәншишмә", "Аманат"ты уҡып үҫкәнгә, бөгөнгө көндә лә миңә башҡорт баҫмалары ҡыҙыҡ. Улар араһында "Киске Өфө" лә бар.**

Әлбиттә, үҫмерлек осорон кисергән тиҫтерҙәремдең донъяға ҡарашы башҡараҡ, быныһын инҡар итмәйем. Беҙгә, әйтәйек, анимэ мәҙәниәте, үҫмерҙәр өсөн төшөрөлгән сит ил сериалдары, уларҙың геройҙары тураһында уҡыуы күңеллерәк. Әммә ошо ҡыҙыҡһыныуҙарыбыҙ менән дә беҙ үҙ милләтебеҙҙең улы йәки ҡыҙы булып ҡалабыҙ. Шулай булғас, беҙгә ошо юҫыҡта ла үҫешергә кәрәк.

"Киске Өфө"нөң бер ҡасан да иҫкермәй торған мәҡәләләрҙән тупланыуы оҡшай миңә. Аҙна һайын уҡымайым мин уны, сығарылыш класс уҡыусыһы булараҡ, ваҡытымды имтихандар, башҡа мәшәҡәттәр күберәк ала. Минең өсөн гәзиттә, үҙем шартлы атап йөрөткәнсә, "быны мотлаҡ белергә тейешмен" тигән төркөмдәге мәҡәләләр бар. Шул уҡ тарих, йолалар, хатта халыҡ медицинаһы, үләндәр буйынса мәғлүмәттәр. Бөгөн бит "этника" тигән йүнәлеш модала. Милли уйындар, сәйәхәттәр ойоштороусылар күп. Бәлки, киләсәктә миңә лә был белемдәр ошондай кимәлдә кәрәк булыр. Унан һуң, өйҙә лә мин был мәғлүмәттәрҙе ҡулланa алаcаҡмын. Иптәштәрең менән һөйләшеп ултырғанда ла, мәҫәлән, башҡорт ырыуҙары тураһында белгәнеңде әйтеп ебәрһәң, бер башҡа үҫеп китәһең бит инде. Минең был ябай фекерҙәрем кемдәрҙәлер йылмайыу ғына уятыр, әммә үҙ йәшең өсөн ошондай кимәлдә генә булһа ла үҙ алдыңа маҡсат ҡуя белергә кәрәктер тип уйлайым. "Киске Өфө" миңә бөгөнгө көндә халҡымдың тарихы, мәҙәниәте буйынса мәғлүмәт биреүсе булып тора һәм был дуҫлыҡҡа мин шат ҡына.

**Әлфиә АРЫҪЛАНОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**




12+

✓ *Сит ил бизнесмендары беҙҙең илдәге һалым системаһына бик көнләшеп ҡарай икән. Ә беҙҙең ярлы-ябаға йылына 9 мең евро килемле һәм шуға күрә һалым түләмәүсе "ярлы" немецтан бик көнләшә.*



БЫНАҒАЙЫШ!

# "ЯРЛЫ" НЕМЕЦТАН КӨНЛӘШӘБЕҘ

**Тағы ла һалым тураһында. Был хаҡта, йәғни һалымдарҙы кәметеү тураһында әленән-әле һүҙ сығып торһа ла, уны шытым бирмәҫ борон урын-ерендә юҡ итергә әҙер генә тороуҙарын беләбеҙ инде. Был юлы ла шулай булды.**

ВТБ (Тышҡы сауҙа банкы) башлығы Андрей Костин, нишләптер, тик торғанда ярлы халыҡ мәнфәғәтен яҡламаҡ булып китте. Мәскәү финанс форумында уның, аҙ тәьмин ителгән граждандарҙың килемен һалымдан азат итергә кәрәк, тигән тәҡдименә ғәжәп итеүселәр күп булды. Һуң, быға са донъяла ярлы халыҡ ҡайғыһы "төштән һуң" тип йәшәгән, ә дөрөҫөрәге, ундай ҡатламға бер ниндәй мөнәсәбәте булмаған юғары ҡатлам вәкиленең ни яғы әйләнде икән, тип бот сапты эксперттар һәм уның тел төбөнән йәшерен ғәйеп эҙләп, публика алдында әллә ни асылып барырға яратмаған банкирҙың был тәҡдиме иң тәүҙә уның үҙ ведомствоһы мәнфәғәтен ҡайғыртыуында, тип фашларға тырышты. Ә сер һандығы бик ябай асыла: А.Костин ярлыларҙы һалымдан азат итеп, байҙар өсөн һалымдың прогрессив шкалаһын индереү кәрәклеге тураһындағы тәҡдиме менән граждандарҙың килеме артыуын теләй, сөнки был бизнес һәм банк берләшмәләре эше өсөн дә бик кәрәк. Ә бына РФ финанс министры А. Силуанов әфәндегә бының һис кәрәге юҡ, уға былай ҙа яҡшы һәм уңайлы: һалым ағылып тора, бюджет тоғо тулып тора, йәғни Силуанов әфәнде үҙе үк таныуынса, бюджетта аҡса бар ул, ләкин, тип ҡурҡыуын белдерә ул, аҡсаның бөтә торған ғәҙәте лә бар бит, бөтһә, уны ҡайҙан алырбыҙ, һалым ташламаһын ул саҡ ярлыларҙан кире тартып алырға тура килмәгәйе, тип кире ҡаға ул Костин тәҡдимен. Күренеп тора, халыҡтан өҙөп-йолҡоп һалым йыйыуҙан тыш, бюджетҡа аҡса туплауҙың башҡа һөҙөмтәлерәк юлдары ҡыҙыҡһындырмай ҙа уны. "Әйҙәгеҙ әле, исмаһам, бер аҙға булһа ла ошо тотороҡло хәлдә йәшәп алайыҡ", ти ул. Әйтерең бармы - ниндәй уңайлы позиция.

Ҡыҫҡаһы, бюджетта аҡса бар, тик уны тотонорға ярамай, юғиһә, ул бөтә - бына шул аңлашыла Мәскәү форумында булып алған был осраҡлы диалогтан. Ә инде башта әйтелеүенсә, ил етәкселәре байҙарға Европа илдәрендәгесә, һалымдың прогрессив шкалаһын индереү хаҡында хатта ишетергә лә теләмәй, ә бит башҡа ваҡытта, власть өсөн кәрәк саҡта, фәҡәт көнбайышса эш итергә яраталар. Уның ҡарауы, сит ил бизнесмендары беҙҙең илдәге һалым системаһына бик көнләшеп ҡарай икән, айырыуса килеменең 30-50 процент өлөшөн ҡаҙнаға түләп тороусылары. Ә беҙҙең ярлы-ябаға йылына 9 мең евро килемле һәм шуға күрә һалым түләмәүсе "ярлы" немецтан бик көнләшә. Шулай итеп, либераль кәйефтәге власть әһелдәренең Рәсәй байҙары аҡсаһының именлеген һаҡлап ҡырталашыуы бесән өйөмө башында ятҡан йән эйәһе ҡылығын хәтерләтә түгелме?..

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

# Баҡсаңда быйыл ниҙәр үҫтерҙең, ҡышҡылыҡҡа ниҙәр әҙерләйһең?



***Менәүәрә БОХАРБАЕВА, мәғариф ветераны, Хәйбулла районы:*** Баҡсала барыһы ла бар, шөкөр, тик бына Аҡъярҙа быйыл өсөнсө йыл ҡоролоҡ аптырата. Һыу менән проблема беҙҙең яҡ өсөн яңылыҡ түгел инде, шуға ла баҡсабыҙҙа теләгән нәмәне үҫтереп уңыш алырға өйрәтте тормош. Һыу юҡ, тип һылтаулап ултырһаң, үҙенән-үҙе бер ни ҙә үҫмәй. Ихласлыҡ, тырышлыҡ кәрәк. Ҡәйнәм әйтә торғайны, аяғың тыпылдамаһа, ауыҙың шапылдамаҫ, тип. Баҡса үҫтереү бик күп көс түгеүҙе талап итә, шунһыҙ мул уңышҡа иҫәп тотоуы ҡыйын, бигерәк тә ярҙамсыларың булмаһа. Эшләп йөрөһә лә ирем баҡса ҡарауға бик ихлас, бөтөн эште лә башҡара. Мин инде шунда сәскә тирәһендә генә йөрөйөм. Йә ялға балалар, ейәндәр ҡайтһа, ярҙамлашып китәләр. Картуфты ла хәҙер кәрәгенсә генә ултыртабыҙ. Артығын ҡайҙа ҡуяһың? Һатыу менән булышып өйрәнелмәне. Унан бит, һыу һибеп үҫтерелгәне менән тәбиғи дым - ысыҡ, ямғыр һыуына туйынып үҫкән картуф араһында айырма бик ҙур. Йәшелсә-емеште инде бына күпләп үҫтерергә була, уны төрлөсә эшкәртеп, ҡышҡылыҡҡа ла әҙерләйһең, витаминға бай яңы өлгөргән мәлендә лә табындан өҙмәйһең. Быйыл һуған насарыраҡ булһа ла помидор уңды, мин унан ҡышҡылыҡҡа лечо әҙерләргә яратам. Бының өсөн тағы ла борос, һуған, кишер кәрәк, ҡайһы саҡ таш ҡабаҡ та өҫтәп ебәрәм, һәр хужабикәнең үҙ ысулы була бит. Ҡыярҙы быйыл дүрт тапҡыр ғына яңынан ултыртҡанмындыр. Теремекләнә алмайынса ултырып, саҡ "әҙәм булып" киттеләр. Умарталарҙы ситкә сығарғайныҡ, һеркәләндерергә бал ҡорттары, себен булмауы ла сәбәп иткәндер. Йәшелсә тоҙлауға килгәндә, мин бындай эшкәртеүгә әллә ни өҫтөнлөк бирмәйем, сөнки йәшелсә-емеште күпләп туңдырам. Миңә шулай ҡулайыраҡ: һыуытҡыстарым ҙур, туңдырылған йәшелсә-емештең витаминдары ла яҡшыраҡ һаҡлана. Шул сәбәпле, емеш-еләк ҡайнатмаларын да күпләп әҙерләмәйем. Ҡайнатылған, тоҙланған, консерваланған йәшелсә-емешкә ҡарағанда, уларҙы аяулыраҡ юлдар менән башҡасараҡ төрлө әҙерләү ысулдарын эҙләйем. Яңыраҡ миңә ошондай бер кәңәш бирҙеләр, гәзит уҡыусылар менән дә уртаҡлашайым әле. Крыжовник бөтәүләй килеш әллә ни ашала һалып бармай, ҡайнатмаһында иһә витаминдары юҡҡа сыға. Шуға күрә емештәрҙе лимон йәки әфлисун ҡушып, ит турағыс аша үткәрергә лә шәкәр менән бутап, туңдырырға. Сәй янына бына тигән десерт, ҡайнатмаларың ары торһон. Һеҙгә лә оҡшар тип уйлайым.

***Рәйлә КУСӘРБАЕВА, һәүәҫкәр баҡсасы:*** Ҡалала йәшәп, баҡса тотоуҙы күптәр хупламай, айырыуса йәштәр яратмай баҡсала эшләргә. Баҡса участкаларында "тамыр ебәргән" өлкәнерәк быуын ҡала кешеләре китеп бөтһә, дачалар ҙа бушап ҡалыр һымаҡ тойола миңә. Мин дә егерме йыллап инде баҡсама бәйле йәшәйем. Зарланып әйтмәйем, башҡаса тормошто күҙ алдына ла килтерә алмайым. Ялым да, отпускым да ошонда ҡайнап үтә, йәмле йәй көндәре инде 4-5 айға күсенеп үк киләм дә эшкә ошонан йөрөйөм, сөнки баҡсам ҡаланан бик алыҫ түгел, транспорт даими йөрөп тора. Күршеләр менән дә туғандар һымаҡ эҫенешеп бөткәнбеҙ инде. Тәбиғәт, саф һауа, әүҙем хәрәкәт барыбер үҙенекен итә: ултырһаң - ашап алаһың, ятһаң - йоҡлап китәһең, тигәндәй. Ә ҡалала дүрт стена эсендә һаулығына, йоҡо алмауына зарланып ултырғандар ҙа күп бит. Ысынлап та, ҡалаға ҡайтһаң, һауа етмәгән төҫлө, тиҙерәк баҡсаға китке килеп тора. Эшкә йөрөгәс, мин тиҙ бирешеп бармай торған сөгөлдөр, кишер, ҡара торма кеүек әрһеҙерәк йәшелсәләр, укроп, петрушка ултыртам. Ҡыяр бик "иркә" культура, уның мәшәҡәте күп, шуға уны әлегә ултыртмайым. Әйткәндәй, олоғая килә баҡсала фәҡәт һаулыҡ өсөн файҙаһы күберәк йәшелсәләр генә ултырта башланым. Помидор, ҡабаҡ яратам, улар организмға бик файҙалы, шуға йыл да ултыртам, бик һәйбәт уңыш бирә, сөнки айышына төшөнөп алдым. Үкенескә, һуған быйыл бик насар булды. Татлы борос ултыртмаһам да, уны һатып алып, үҙемдең баҡса помидорын, кишер, һуған ҡушып, ҡышҡылыҡҡа стериллəп салат эшләп ҡуям. Бер нисә төп ҡарағат бар, емешен тиреп алғас, мөмкин тиклем витаминдарын юғалтмаһын өсөн 5 минут ҡына ҡайнатып эшләй торған желе әҙерләйем. Баҡсамда иң тәүҙә ер еләге уңыш бирә. Быйыл алма йылы: емерелеп унды, уңышын күтәрә алмай, хатта ботаҡтары һынды алмағастың. Елгә тупылдап алма ҡойола, йыйып өлгөрөп булмай. Туғандар ҙа, таныштар ҙа килеп тейәп алып китте, үҙебеҙгә лә етерлек ҡалды. Алманан бөлеш һалырға, джем, ҡайнатма, компот эшләргә була. Шәкәр ҡушып эшкәртергә теләмәһәң, телгеләп, киптерергә мөмкин. Аҙаҡ унан компот ҡайнатаһың, бешеренгәндә файҙаланаһың. Алма уңған йылы ҡыш бөлеш бешерергә эҫлек әҙерләп ҡуйырға ла була.

***Айнур МӨХӘМӘТЙӘНОВ, табип:*** Йәш кеше булараҡ, мин әле баҡса һатып алырға йыйынмайым, ә былай баҡса эштәре миңә яҡшы таныш, район үҙәгендә йәшәүсе атайым менән әсәйем ғүмер буйы баҡса тоттолар, мин бәләкәйҙән уларға ярҙамлашып үҫтем. Әле ялға ҡайтҡанымда ла ярҙамлашып китәм. Әйткәндәй, күршеләребеҙ ҙә бик тырыш баҡсасылар. Йәй етһә, күрше апайҙың баҡса рәшәткәләрендә ялтыратып йыуылған банкалар эленеп тора башлай. Тимәк, уңған хужабикә тиҙҙән яңы уңышты банкаларға тултырып, йәшелсә-емеш эшкәртә башлаясаҡ. Уларҙың баҡса баҙы кәштәләрендә йөҙәрләгән банка тоҙло ҡыяр, помидор, һәр төрлө салат, ҡайнатма, компоттыр - һығылып ултыра, йыл да шулай йыйып алған баҡса уңышын күп итеп консервалап ҡуялар. Беҙҙең ғаиләлә, киреһенсә, бындай эшкә артыҡ әһәмиәт бирелмәне. Әсәйем консерваланған ризыҡ төрҙәренә шикләнеберәк ҡарай, унан эшкәртелгән емеш-еләктең файҙаһы ла ҡалмай тигән фекерҙә. Минеңсә, консервалау ҡағиҙәләрен теүәл үтәп, банкаларҙы ентекле стериллəп эшләһәң, аҙаҡ уларҙы һалҡын, ҡараңғы мөгәрәптә һаҡлаһаң, бындай продукция бер, хатта ике йыл боҙолмай һаҡлана, тик шунан да артыҡ һаҡлараға ярамай. Эшкәртеүгә емеш-еләктең боҙолмаған, сифатлыларын ғына һайлап алырға кәрәк, сөнки боҙола башлағандарында микотоксиндар була, улар хатта ҡат-ҡат стериллəүгә лә бирешмәй. Ҡапҡастарын япҡас, банкаларҙы баштүбән әйләндереп тотоғоҙ, әгәр улар ҡоро көйө ҡала икән, тимәк, дөрөҫ ябылған. Тоҙо йә шәкәре етмәһә йәки стериллəү һәм һаҡлауҙа тотоу шарттары тейешле башҡарылмаһа, йыш ҡына банкалағы йәшелсә-емештең төҫө үҙгәрә, банканың ҡапҡасы ҡубып сыға йә продукция әсей башлай, өҫтөнә үңәҙ ҡалҡа. Ҡайһы берәүҙәр уға шәкәр йә тоҙ өҫтәп һалып, яңынан эшкәртеп алырға уйлаһа, ул дөрөҫ эшләмәй, киреһенсә, үҙенә һәм яҡындарына зыян ғына килтерә, сөнки консерваланған йәшелсә-емештән ботулизм менән ағыуланыу ихтималлығы бар. Шуға күрә боҙолған банкаларҙы ҡулланмау яҡшыраҡ, уларҙы йәлләп тормайынса ташларға кәрәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓19 сентябрҙә инаугурация тантанаһында Радий Хәбиров рус һәм башҡорт телдәрендә ант бирҙе һәм рәсми рәүештә Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын башҡара башланы. Артабан Радий Фәрит улы Башҡортостандың 2025 йылға тиклемге социаль-иҡтисади үҫешенең стратегик йүнәлештәре һәм уны тормошҡа ашырыу буйынса анығ пландар менән таныштырҙы. Был мөһим документ республикабыҙ өсөн яңы биш йыллыҡ үҫеш программаһы булып торасаҡ.

✓2019 йылдың август айы өсөн губернаторҙар медиарейтингында Башҡортостан етәксеһе Радий Хәбиров дүртенсе урынды алды. Август рейтингында беренсе урында - Мәскәү мэры Сергей Собянин. Икенсе урында - Санкт-Петербург губернаторы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Александр Беглов, өсөнсөлә - Силәбе өлкәһе етәксеһе Алексей Текслер. Ағымдағы йылдың авгусында Радий Хәбиров Волга буйы федераль округы рейтингында беренсе урынды алды.

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров күренекле скрипкасы һәм дирижер, СССР-ҙың һәм Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы Владимир Спиваковты Салауат Юлаев ордены менән бүләкләне, миллиондарса башҡортостандар исеменән 12 сентябрҙә билдәләгән 75 йәшлек юбилейы менән ҡотланы.

✓Башҡортостанда #Йәшел Башҡортостан акцияһы дауам итә: 3 мең үҫенте һәм декоратив ҡыуаҡлыҡ ултыртыу күҙаллана, шуларҙың 1,2 меңен - "Ҡаланы йәшелләндереү хужалығы", ҡалғанын коммуналь хеҙмәттәр, ойошмалар, предприятиелар ултырта.

✓Был көндәрҙә Мәскәүҙә Башҡортостандың 100 йыллығы билдәләнә. Ҡаланың төрлө майҙансыҡтарында һаулыҡ һаҡлауға, мәғарифҡа, бизнесҡа, туризмға арналған түңәрәк өҫтәлдәр һәм стратегик сессиялар ойошторола. Программала Мәскәүҙең Башҡорт мәҙәни үҙәген асыу тантанаһы ла ҡаралған. Күп функциялы майҙансыҡ башҡорт милли мәҙәниәтен һаҡлауға һәм уны үҫтереүгә булышлыҡ итер тип күҙаллана.

✓Башҡортостанда планлаштырылған майҙандарҙың 66 проценты - 361 мең гектарҙан ашыуында ужым ашлығы сәселгән. Дәүләкән, Көйөргәҙе, Саҡмағош районларында планлаштырылған майҙандарҙа сәсеү эштәре башҡарылған. Илеш, Стәрлебаш, Ауырғазы райондары сәсеүҙе тамамлай, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығынан.

✔ ***Әлбиттә, илдең башҡа ҙур ҡалаларында һәм хатта сит илдәрҙә сифатлы белем алырға, хеҙмәт тәжрибәһе тупларға була, әммә ата-бабалар тыуған ергә ҡайтырға һәм уға хеҙмәт итергә кәрәк. Быны мотлаҡ талап тип аңлау мөһим.***



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЗАМАНСА ЙЫРҘАРҒА ЛА...

## рухи орлоҡ һалынһын



***Илдар ШАКИРОВ, "Йатаған" этно-төркөмө етәксеһе:*** Башҡорт халҡының милли музыка мәҙәниәтенә ҡыҙыҡһыныуы юғалыуы бөгөнгө көндә иң актуаль проблемаларҙың береһе, минеңсә. Ҡыҙғаныҫҡа ҡуҙә, йәш быуын күберәк Көнбайыш мәҙәниәтенә тартыла, бигерәк тә башҡортса йырлаған замандаштарға ҡағыла был. Мәсьәләнең төбөнә төшөнә башлаһаң, әле 19-сы быуатта уҡ Сергей Рыбаков, Ғайса Йәнекәев, Руф Игнатьев кеүек билдәле сәнғәт эшмәкәрҙәре һәм крайҙы өйрәнеүселәр был турала үҙ хеҙмәттәрендә яҙып ҡалдырған. Шул осорҙа ла ололар йәштәрҙең башҡорт халҡына хас булмаған йырҙар башҡарыуы турала ында һуҡранып һөйләгән. Радио һәм телевидение юҡта, беҙҙең төбәктә донъя мәҙәниәте тураһында мәғлүмәт булмаған заманда ла шундай проблема килеп тыуған икән, бөгөнгөбөҙ тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Ҡайһы бер замандаш йырсыларҙың ижадында бөтөнләй башҡорт халҡының милли үҙенсәлеге юҡ. Йыр башҡорт телендә булыу менәнме ни, телебеҙҙең күп ҡырлылығы, матурлығы, шиғриәтлеге, башҡорт халҡының фәлсәфәһе сағылыш тапмаған.

Заманса йырҙарға рухи орлоҡ һалынмаған икән, был йәмғиәтебеҙҙең ҙур бәләһе. Йырҙарының мәғәнәһе булмаған сит ил башҡарыусыларынан үрнәк алыу һөҙөмтәһендә йәштәрҙең донъяға ҡарашы, ата-әсәләренә мөнәсәбәте, әхлағы һәм тәрбиәһе үҙгәрә. Иң асындырғаны шул: бәләкәй балаларыбыҙ ҙа ошоно йәш атай-әсәйҙәре менән бергә аңына һеңдереп үҫә. Әгәр ҙә әлек балалар халыҡтың бөтә рухи ҡиммәттәрен йыр-моңо һәм көнкүреше аша һеңдереп үҫһә, бөгөн балаларҙың "уҡытыу әсбаптары" еңел-елпе йырҙар, күңел асыуға ҡоролған тапшырыуҙар. Был беҙ бара торған юл түгел, сөнки ул милләтте бәйелһеҙлеккә, әхлаҡһыҙлыҡҡа алып килә һәм шуға бөгөн ғаиләләр тарҡалыу осраҡтары артыуын күҙәтәбеҙ ҙә инде.

Башҡорт халыҡ йырҙарын, моңдарын заман тыңлаусыһына нисек еткерергә һәм модалы итергә? Беҙ, "Йатаған" этно-төркөмө, нисәмә йылдар ошо һорауға яуап эҙләйбеҙ, әммә аныҡ ҡына яуап тапҡаныбыҙ юҡ. Шуға ла иңебеҙҙә халҡыбыҙҙың мәҙәниәтен һаҡлау бурысы ятыуын аңлайбыҙ. Быны башҡа ижадташтар: эстрада йырсылары, музыкаль төркөмдәр ҙә төшөнөргә теләйеш. Унан инде, милләттәштәр үҙҙәре лә, балаларын да халыҡ мәҙәниәтенә, йыр-моңона, ауыҙтел ижадына ылыҡтырырға тейеш. Сөнки уларҙа һабаҡ алырлыҡ тәрән мәғәнә һалынған. Әлбиттә, былай тип әйтеүе генә еңел. Мәғлүмәт күп заманда йәшәгән кешегә боронғо, "иҫке" йырҙар, көйҙәр хуш килһен өсөн уның милли үҙаңы булырға тейеш. Кеше был донъяның яҡшылыҡтарын, байлыҡтарын татыр өсөн генә килмәгән, һәр беребеҙҙең тәҡдире бар. Ата-бабалары быуаттар аша телдән-телгә күсереп һаҡлап килгән рухи ҡиммәттәр сылбырын үҙ быуынында өҙөп ҡалдырмау башҡорттоң тәҡдиренә яҙылған, тип иҫәпләргә кәрәк.

Үҙең ниндәй милләт кешеһе булыуыңды яҡшы белһәң, шунан милли үҙаң менән бергә рухиәт тә ҡайтыр. Үҙ асылына ҡайтҡан атай-әсәй балаһына ниндәй йәнһүрәттәр күрһәтергә, ниндәй йырҙар тыңларға, ниндәй телдә һөйләшергә, ниндәй тәрбиә бирергә кәрәкле булыуын үҙе лә яҡшы беләсәк. Шулай ҙа, бөгөн халыҡ көйҙәренә заманса "тышлыҡ" кейҙермәйенсә, тыңлаусыға "каптырып" булмай. 2017 йылда сығарған "Ерем ауазы" йыйынтығын сығарғанда беҙ ошоно хәтеребеҙҙә тотоп эшләргә тырыштыҡ, халыҡ ижадыбыҙҙы яҡшы ҡабул иткәйне. Беҙ кешеләр күңелендә үҙ милли асылына тап килгән йыр-моңға тартылыу барлығын тойҙоҡ. Белеүебеҙсә, ағастың тамыры ныҡлы булғанда ғына ул үҫә һәм сәскә ата. Милләттәштәр ошо хаҡта иҫтәрендә тотһон һәм үҙҙәре лә, киләсәк быуындары ла туған башҡорт мәҙәниәтебеҙҙе һөйөп ҡабул итһен, тип теләгем килә. Сөнки быуаттар аша телдән-телгә күсеп килгән башҡорт халҡының йырмоңо имен киләсәгебеҙ нигеҙе ул.

**Әйткәндәй, "Йатаған" этно-төркөмө Ш. Бабич исемендәге республика йәштәр дәүләт премияһына тәҡдим ителде.**

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# НИҢӘ КИТӘЛӘР...

## тыуған ерҙәрҙе ташлап?

**(Башы 1-се биттә).**

Өгөт-нәсихәт һәм тыйыуҙар менән был мәсьәләне хәл итеп булмай. Кәмендә, һәр муниципалитетта һәм ауылда йәмғәт тыңлауҙары үткәреп, халыҡ фекерен тыңлауҙан башларға кәрәк эште. Халыҡ һәр ваҡыт ысынбарлыҡҡа тап килгәнде асыҡтан-асыҡ әйтеп, тураһын һөйләй. Үҙебеҙ ойошоп, муниципаль власты ауылды, ундағы әлекке производстволарҙы, инфраструктураны тергеҙеү буйынса реаль эшкә тотонорға ашыҡтырырға, "мәжбүр итергә" кәрәк. Ауылда граждандар йәмғиәте һәм ысын үҙидара институттары эшләп китһен өсөн үҙебеҙгә тырышлыҡ күрһәтергә кәрәк. Был йәһәттән хоҡуҡи һәм ойоштороу нигеҙҙәре ентекле эшләнгән, әммә улар беҙҙең әүҙемлектән тыш мәғәнәһен юғалта. Эште бәләкәйҙән башларға була, мәҫәлән, ауылдағы шишмә инештәрен таҙартыу, яңыртыу, кәртәләүҙән. Был кешеләрҙе берләштерә, урындағы етәкселекте халыҡҡа яҡынайта, насар эштәрҙән ҡурсалай, йәштәрҙең туй сараларын үткәргәндә кәрәкле урынға әүерелә, ауылдан киткән кешеләрҙе үҙенә тартып торған рухи һәм тәбиғәт ҡомартҡыһы була һ.б. Шишмәләрҙең берләштереүсе һәм рухи (хәрәфәти) асылын ата-бабаларыбыҙ беҙгә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ аңлаған, башҡа мәғәнәүи йөкмәткеләре тураһында әйтеп тә тораһы түгел. Яңы, ысын мәғәнәһендә ауыл хужалығы кооперативтарын (колхоздар менән бутамаҫҡа) тәҙөү йәһәтенән дә берләшергә кәрәк. Шул тиклем яҡшы һәм уңдырышлы ерҙәребеҙ бар, улар коллектив хеҙмәт һалынған объект, халҡыбыҙҙың матди байлыҡ сығанағы булды һәм булырға тейеш. Ере булған халыҡ ярлы була алмай.

Миграцияны тотҡарлаған факторҙар етерлек. Уларҙы берәмләп туплап, үҙебеҙҙең һәм киләсәк быуын мәнфәғәтенә файҙаланырға кәрәк. Әлбиттә, республиканан ситкә этәреүсе факторҙарҙы мөмкин тиклем кәметеү ҙә мөһим. Бында төбәк һәм урындағы власть органдары тейешле социаль-иҡтисади өлкәләге сәйәсәт һәм мәғариф стратегияһы алып барыу йәһәтенән әүҙем эшләргә бурыслы. Инвестициялар йәлеп итеү генә етмәй, уның менән дөрөҫ идара итеү һәм быға тиклем булған һәм буласаҡ бай тәбиғәтебеҙ һәм кешелек потенциалын файҙалана белеү ҙә кәрәк.

Республиканан ситтә йәшәүселәргә, вахтаға китеүселәргә тыуған төйәктәрен мәңгегә ташламаһындар ине, тип теләгем килә. Әлбиттә, илдең башҡа ҙур ҡалаларында һәм хатта сит илдәрҙә сифатлы белем алырға, хеҙмәт тәжрибәһе тупларға була, әммә ата-бабалар тыуған ергә ҡайтырға һәм уға хеҙмәт итергә кәрәк. Быны выждан ҡушыуы ғына тип түгел, бөгөнгө еңел булмаған заманда мотлаҡ талап тип аңлау мөһим. Был осор ысынлап та ябайҙарҙан түгел. Бер проблема артынан икенсеһе килеп сығып тора, шунда сағыла ла инде халҡың кискенлеге, көсөргәнешлеге. Бер вахтовиктар төркөмөн икенсеһе алыштыра, хеҙмәт мигранттарының яңы тулҡыны барлыҡҡа килә: йәйге осорҙа алынған ҡулланыусылар һәм башҡа төр кредиттарын ҡапларға теләп, эш эҙләп сығып китеүселәр. Был тема өҫтәмә анализ һәм баһа биреүҙе талап итә.

**Рим ВӘЛИӘХМӘТОВ,**
**Рәсәй Фәндәр академияһы Социология институтының Башҡортостан филиалы директоры.**

## Н И М Ә ?  Ҡ А Й Ҙ А ?  Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостанда пенсионерҙың йәшәү минимумы 1,5 мең һумға тиерлек арттырылды. 2020 йылға ул 8645 һум күләмендә билдәләнде. Социаль түләүҙәр менән йәшәү минимумынан түбәнерәк пенсия алған һәм эшләмәгән пенсионерҙар ошо кимәлгә тиклем өҫтәмә алырға тейеш. Был мәсьәлә менән Пенсия фонды шөғөлләнә, аҡса федераль бюджеттан бүленә.

✔Башҡортостан Канаданың Монреаль ҡалаһындағы "Апимондия"ла ике алтын миҙал яуланы. "Беҙҙең ассоциация - Рәсәйҙә балдың сифаты өсөн "Апимондия" конгресында алтын миҙалдар алған берҙән-бер ойошма! Башҡортостан умартасылары 2013 йылда - Украинанан, 2015 йылда - Көньяҡ Кореянан, 2017 йылда Төркиәнән наградалар алып ҡайтты һәм, ниһайәт, 2019 йылда Канадала еңде", - тине Алдынғы бал эшкәртеүселәр, умартаслар һәм ғалимдар ассоциацияһы вице-президенты Сергей Мөләков.

✔"Аманат" журналы "Тылсымлы һүҙ" Бөтә Рәсәй балалар матбуғаты фестивалендә милли телдәге иң яҡшы баҫма тип аталды. Унда Рәсәй һәм Белоруссия баҫмалары ҡатнашты. Быйыл балалар киң мәғлүмәт саралары конкурсына ғаризалар һаны былтырғы конкурс менән сағыштырғанда ике тапҡырға тиерлек күберәк булды һәм 130 гәзит-журналдан ашып китте, тип хәбәр иттеләр журнал редакцияһынан.

✔Өфөлә Кадомцевтар урамынан алып Галле ҡалаһы урамына тиклемге участкала 400 метр оҙонлоҡтағы юл төҙәкләндерелә. Эштәрҙе 30 сентябргә тиклем тамамлау күҙаллана. Урындағы юл "Хәүефһеҙ һәм сифатлы автомобиль юлдары" милли проекты сиктәрендә ремонтлана. Йылы миҙгел тамамланыуға баш ҡаланың дөйөм оҙонлоғо 47 саҡрымдан ашыу урамдарының 28 участкаһы тәртипкә килтерелә. Бөгөнгә 18 объектта эштәр тулыһынса тамамланған һәм ҡабул ителгән.

✔Башҡортостанда инвалид балаларҙы реабилитациялауға аҡсалата сертификаттар тапшырыу өсөн ғаризалар ҡабул итеү башланды. Сертификаттың хаҡы - 41 722, 59 һум. Уны теләһә ниндәй шифаханала йәки реабилитация үҙәгендә 14 йәшкәсә мөмкинлектәре сикле балаларҙы дауалау һәм реабилитациялау өсөн файҙаланырға мөмкин. Быйыл өсөн Башҡортостан бюджетынан 63 миллион һум бүленде. Сертификаттарҙы Республика халыҡты социаль хеҙмәтләндереү үҙәге бирә.

✔ *Башҡортостан аттар һаны буйынса илдә лидерҙарҙың береһе булып тора. Тулайым ҡымыҙ етештереү күләмендә республиканың өлөшө 45 процент тәшкил итә. Йылҡыларҙың күпселеге - Урал аръяғында.*



ҠЫҪҠАСА

# ИХАТАҢ ТӨҘӨКМӨ?

✔ **Киләһе йылдан республиканың барлыҡ муниципаль берәмектәрендә Башҡортостан Башлығы ихаталары барлыҡҡа киләсәк.** Республика етәксеһе Радий Хәбиров Өфөнөң Сипайлово биҫтәһен ҡарап йөрөгән саҡта шул хаҡта белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, бер нисә төбәктә ошондай программалар бар. Был ихаталар республика Башлығы фондынан финансланырға тейеш. Бындай ихаталарҙы муниципалитетта йәшәүселәр тауыш биреү юлы менән үҙҙәре билдәләй, һунынан ғариза республика Башлығына ебәрелә. "Енеүсе ихата буйынса минә ғариза яҙыла һәм мин уны финанслай башлайым. Бер ихатаға 5 миллион һум бүлергә ниәтләйбеҙ. Ихата ҙур икән, был аҡсаға унда балалар майҙансығы ҡуйырға, ихатаның биләмәһе ныҡ ҙур булмаһа, шул аҡсаға уны тулыһынса төҙөкләндерергә мөмкин", - тине Радий Хәбиров, "Башинформ" агентлығы һорауына яуап биреп.

✔ **Башҡортостанда медицина хеҙмәткәрҙәренә актуаль ихтыяжды артабан кәмеүе билдәләнә. 1 сентябргә ыңғай баланс 457 табип тәшкил итә.** Быйыл республика медицина учреждениеларына бөтәһе 178 медицина хеҙмәткәре килде. Башҡортостанда медицина кадрҙарын йәлеп итеү буйынса юл картаһы ғәмәлгә ашырыла. "Ауыл табибы" федераль проекты буйынса 99 табипҡа - 1 миллион һум, 10 фельдшерға 500 мең һум бирелә. "Ауыл фельдшеры" программаһы буйынса 72 фельдшерға 500 мең һум түләнә. Муниципаль-ара үҙәктәр өсөн ихтыяж ҙур булған 125 белгескә - 1-әр миллион һум. Маҡсатлы йүнәлтмә менән уҡығандарға аҡса түләнә башланы. 1033 студентҡа - 5 мең һум, 416 ординаторға 8 мең һум бирелә. Бынан тыш, медицина хеҙмәткәрҙәренең минималь эш хаҡы 13 042-нән 17 177 һумға тиклем арттырылды.

✔ **Халыҡтың торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә сығымдар өлөшө буйынса төбәктәр рейтингында Башҡортостан 10-сы урынды биләй, тип хәбәр итә Росстат мәғлүмәттәренә таянып ил төбәктәре рейтингын төҙөгән РИА Новости.** 2018 йылда Башҡортостанда бер ғаиләгә айлыҡ түләүҙең уртаса суммаһы 3430 һум тәшкил итте. Ғаилә сығымдары өлөшөндә ул 7,8 процент булды.Рәсәй буйынса уртаса күрһәткес 9,6 процентҡа тиң, был 4385 һум күләмендәге түләүгә тап килә. Илдә коммуналь хеҙмәттәр өсөн иң аҙ сумманы Дағстанда һәм Ингушетияла йәшәүселәр түләй - 5 процентҡа кәмерәк. Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн иң күбен Камчаткала һәм Колымала йәшәүселәр түләй - 14 процент.

✔ **Киләһе йылда пенсияның уртаса күләме 15 мең һум самаһы була.** Эшләмәгән пенсионерҙар өсөн ҡартлыҡ буйынса страховка пенсияһының уртаса күләме - 16,4 мең һум. Быйыл илдә страховка пенсияһы 7,05 процентҡа индексацияланды һәм инфляция кимәленән ашып китте.Рәсәй Хөкүмәте вице-премьеры Татьяна Голикова һүҙҙәренсә, киләсәктә лә ошондай алымды ҡулланыу күҙаллана. Әйтәйек, 2020 йылда страховка пенсияһы - 6,6 процентҡа, социаль пенсияһы 7 процентҡа индексацияланасаҡ. Башҡортостанстаттың 2019 йылдың 1 июленә ҡарата мәғлүмәттәре буйынса, республикала 1,183 миллион пенсионер иҫәпләнде. Уларҙың 1,086 миллионы страховка пенсияһын алды. Был ваҡытҡа республикала страховка пенсияһының уртаса күләме 14 мендән ашты.

ТӨРЛӨҺӨНӨН

# ЙЫЛҠЫСЫЛЫҠТА КӨСЛӨБӨҘ



**Беҙ йылҡысылыҡта һәр ваҡыт көслө булдыҡ, артабан да алдынғылыҡты бирергә йыйынмайбыҙ, тип яҙҙы Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге үҙенең сәхифәһендә Хөкүмәттә тармаҡты үҫтереү мәсьәләләре буйынса үткән кәңәшмәнән һуң.**

"Йылҡысылыҡ беҙҙең өсөн милли традиция ғына түгел. Был - иҡтисадыбыҙҙың мөһим өлөшө. Беҙ - аттарҙың һаны буйынса илдә икенсе, тармаҡта 50 меңдән ашыу кеше эшләй. Ләкин һуңғы ваҡытта ул тарҡала башланы. Белгестәр етешмәй, хужалыҡтарҙың һәм ипподромдарҙың матди базаһы иҫкерә. Йылҡы һаны ла, легендар башҡорт аты генофондының сифаты ла кәмей. Шуға ла ошондай ҡарарҙар ҡабул иттек:

- 2020 йылға тоҡомсолоҡ эшен тәртипкә килтерергә;
- тармаҡҡа ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу өсөн даими ат сабыштары уҙғарырға;
- быйыл йылҡы үрсетеүселәргә дәүләт ярҙамы күрһәтергә;
- киләһе йылда белгестәрҙе уҡыта башларға;
- балалар ат-спорт комплекстарына ярҙам итергә".

Башҡортостан аттар һаны буйынса илдә лидерҙарҙың береһе булып тора. Тулайым ҡымыҙ етештереү күләмендә республиканың өлөшө 45 процент тәшкил итә. Йылҡыларҙың күпселеге - Урал арьяғында. 2018 йылда республикала 121,5 мең ат иҫәпләнде, киләһе ике йылға бурыс - уларҙың һанын меңгә арттырыу. 2019 йылда Башҡортостан предприятиелары һәм фермерҙарының "2018-2020 йылдарҙа йылҡысылыҡты үҫтереү" ярҙамсы программаһы сиктәрендә йылҡысылыҡты үҫтереүгә республика бюджетынан 100 миллион һумға яҡын аҡса алыу мөмкинлеге бар.

# МИНИСТР МЕНӘН...

**Өфөлә өлкән класс уҡыусылары өсөн "Министр менән асыҡ дәрестәр" проекты атҡарыла башланы. Ойоштороусыһы - Башҡортостан Республикаһының Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты.**

Уҡыусыларҙың министрлыҡ һәм ведомство етәкселәре, бизнес-берләшмә вәкилдәре менән осрашыуҙарын йыл дауамында аҙна һайын уҙғарыу күҙаллана. "Университет ҡайнау нөктәһе" Тыныслыҡ урамындағы 14-се бинала, "Киләсәк фабрикаһы" коворкинг үҙәгендә урынлашҡан. Өлкән класс уҡыусыларының аҙна һайын министрҙар, эшҡыуарҙар менән осрашып, үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарын биреү мөмкинлеге бар. "Программа 9-11 класс уҡыусылары өсөн иҫәпләнгән. Унын төп маҡсаты - уҡыусыларҙа эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлегенә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу. Бурысы - донъяға һәм уның мөмкинлектәренә ҡарашты үҙгәртеү, - тип билдәләне Башҡортостан Республикаһы Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитетының матбуғат секретары Анастасия Сарбашева. - Башланғыс иҡтисади белемгә эйә булған үсмерҙәр ғаилә, мәктәп, республика алдында торған проблемаларҙы ҡулланыусы күҙлегенән генә түгел, ә новатор күҙлеген дә күреп баһалай, үҙҙәренең хәл итеү юлын тәҡдим итә ала". Бер "Министр менән асыҡ дәрес" программаһы ике академик сәғәткә иҫәпләнгән.

# ХОҠУҠ ЯҠЛАУСЫЛАР

**Өфөлә Кеше хоҡуҡтары һәм граждандар йәмғиәте институттарын үҫтереү буйынса советтың беренсе ултырышы уҙҙы.**

Сентябрь башында Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы указы менән Кеше хоҡуҡтары буйынса совет булдырылғайны. Яңы консультация органы кешенең һәм граждандың хоҡуҡтарын, азатлыҡын яҡлауҙы тәьмин итеүгә ярҙам күрһәтеүгә йүнәлтелгән. Советтың бурыстары, атап әйткәндә, ҡануниәтте боҙоу һәм граждандарҙың хоҡуҡтарын ҡыҫыу осраҡтарын тикшереүгә ҡайтып ҡала. Совет составының бер өлөшө йәмәғәтселек фекере ярҙамында төҙөлдө. Башҡортостанда йәшәүселәр Совет ағзалығына кандидаттарҙы үҙҙәре тәҡдим итте. Составҡа 36 кеше инде. Совет рәйесе - Ҡала проекттарын үҫтереү фонды директоры Владимир Барабаш, уның рәйесе - Вадим Беляков, яуаплы секретары - юрист һәм хоҡуҡ яҡлаусы Зөлфиә Ғайсина. Кеше хоҡуҡтары буйынса совет ултырыштары йылына кәмендә ике тапҡыр үткәрелергә тейеш.

# БАШҠОРТСА ӨЙРӘН

**Сит илдәрҙә йәшәгән милләттәштәребеҙ өсөн башҡорт теленән онлайн-курстар башлана.**

Баш.easy порталында виртуаль башҡорт теле кабинеты булдырылған. Унда онлайн-дәрестәр: аудио һәм видеочаттар, өйрәтеүсе контент урынлаштырылған. Дәрестәрҙе республика мәктәптәренең алдынғы башҡорт теле уҡытыусылары алып бара. Бөтәһе 34 дәрес үткәреү күҙаллана. Улар 2019 йылдың 15 сентябренән 2020 йылдың 31 майына тиклем һәр йәкшәмбе ойоштороласаҡ. Теләге булғандар өсөн интернет һәм стационар компьютер йәки кеҫә телефоны ғына кәрәк. Онлайн-дәрестәр "Туған тел илселәре" республика акцияһы барышында башлана. Проекты Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы һәм Милли мәғариф буйынса ресурс үҙәге иғлан иткән. Ул туған башҡорт телен, телмәрен өйрәнергә, Башҡортостан тураһында күберәк мәғлүмәт белергә, башҡортса аҫәрҙәр уҡырға, башҡорт халҡының мәҙәниәте менән танышырға теләгәндәргә ярҙам итеүгә йүнәлтелгән. Башҡорт телен өйрәнергә һәм акцияла ҡатнашырға теләгәндәргә www.basheasy.com адресы буйынса инеп теркәлергә кәрәк. Бәйләнеш өсөн телефон: 8 (347) 216-36-35, электрон почта: rsentr@inbox.ru.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Рәсәй банкы төп ставканы 0,25 процент пунктына - йылына 7,25-тән 7 процентҡа тиклем төшөрҙө.Һуңғы тапҡыр ул 2014 йылдың мартында ошондай күрһәткескә еткәйне. Үҙәк банктың бөгөнгө ҡарары - йыл башынан аҡса-кредит сәйәсәтен өсөнсө йомшартыу, был, үҙ сиратында, банк ставкаларын кәметеүгә килтерә. Шул иҫәптән, ипотека кредиттары буйынса. Фараздарға ярашлы, быйыл ноябрь аҙағына илдә уртаса ипотека ставкаһы 9,5 процентҡа төшөүе мөмкин.

✔Башҡортостанда аҙыҡ-түлеккә хаҡтарҙың дөйөм кимәленең түбәнәйеүе күҙәтелә, был йәшелсәләрҙең миҙгелле арзанайыуына бәйле. Башстат мәғлүмәттәре буйынса, бер айҙа картуфҡа, сөгөлдөргә, башлы һуғанға, кишергә, ҡыярға, помидорға, грушаға, бананға, лимонға, алмаға, виноградҡа хаҡтар төшкән. Шул уҡ ваҡытта аҡ кәсәнле кәбеҫтәгә, әфлисунға, тундырылған йәшелсәләргә хаҡ арткан.

✔Түбәнге Новгородта "Красное Сормово" заводында "Мостай Кәрим" круиз лайнерын һыуға төшөрөү тантанаһы уҙҙы. Карап Мәскәү - Әстерхан, Мәскәү - Санкт-Петербург һәм Мәскәү - Дондағы Ростов маршруты буйынса пассажирҙар йөрөтөү өсөн тәғәйенләнгән. 2020 йылдың февраленда теплоходты заказсыға тапшырыу күҙаллана, ә 2020 йылдың майында карап тәүге круизға сыға.

✔Нурсолтан ҡалаһының Дуҫлыҡ йортонда Булат Йосоповтың "Бабич" һәм "Беренсе республика" фильмдары күрһәтелде. Картиналар башҡорт телендә русса субтитрҙар менән барҙы. Фильмдар күрһәтеүҙе "Аҡбуҙат" башҡорт этномәҙәни берләшмәһе ойошторҙо. Сараға Башҡортостанда тыуып үҫкәндәр, шулай уҡ Ҡаҙағстандың төп халҡы, студенттар, булаҫаҡ кинематографистар йыйылды.

✔"Һеңлекәш" фильмы режиссеры Александр Галибин XII "Алтын Феникс" Бөтә Рәсәй актерҙар һәм режиссерҙар кинофестивалендә актер Анатолий Папанов исемендәге махсус бүләккә лайыҡ булды. "Һеңлекәш" хәрби драмаһы Мостай Кәримдең "Беҙҙең өйҙөң йәме" повесына нигеҙләнгән. Фильмды Рәсәй Федерацияһының Мәҙәниәт министрлығы һәм Мостай Кәрим исемендәге фонд булышлығында "Мотор Фильм Студия" кинокомпанияһы төшөргән.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ЭШЛӘТЕРГӘМЕ? ЭШЛӘТМӘҪКӘМЕ?

**Көҙгө көнгә ышаныс бармы - бер көн йылы торһа, ҡапыл ғына һыуытып ебәрә. Быйыл йылыға туйынмаған халыҡ саҡ ҡына ҡояш күренһә, шунда уҡ еңел кейемгә күсергә тырыша. Әммә тәбиғәттең үҙ ҡануны - көндә тағы үҙгәртә лә ебәрә. Тап шундай ваҡытта балалар ғына түгел, ололар ҙа сирләй башлай ҙа инде. Өфө ҡала хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендәге һөйләшеү ҙә ошо темаға бағышланды.**

Киҙеү һәм ОРВИ менән сирләүселәр һаны, шулай уҡ эпидемик миҙгелгә әҙерлек торошо менән Роспотребнадзорҙың Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы етәксеһе урынбаҫары Галина Пермина таныштырҙы. Билдәләнеүенсә, сентябрь башланыу менән Өфөлә киҙеүгә бәйле булмаған ОРВИ менән сирләүселәрҙең артыуы күҙәтелә. 9-15 сентябрь араһында ҡалала барлығы 5276 сирле теркәлгән, шуларҙың 2626-һы - балалар.

Бөгөн киҙеү инфекцияһын иҫкәртеүҙең иң һөҙөмтәле ысулы булып вакцина профилактикаһы һанала. Гәҙәттәгесә, мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларына йөрөүсе балалар, мәктәп уҡыусылары, студенттар, медицина хеҙмәткәрҙәре, мәғариф системаһы хеҙмәткәрҙәре, хәрби хеҙмәткә саҡырылыусылар (көҙгө һәм яҙғы саҡырылыш), 60 йәштән өлкәндәр һ.б. федераль бюджет иҫәбенә бушлай вакцинациялана. Галина Пермина белдереүенсә, киҙеү менән сирләүгә контролдә маҡсатында халыҡтың 45 проценты прививка эшләтергә тейеш. Өфөлә 524 465 кешегә (46 процент) вакцинация эшләү планлаштырылған. Әлеге ваҡытҡа республикаға балалар өсөн 180957 доза, йәғни пландың 43,3 проценты һәм ололар өсөн пландың 43,4 проценты күләмендә (613350 доза) "Совигрипп" вакцинаһы килтерелгән. Йыл башынан алып ҡарағанда, ҡалала барлығы 72798 кеше, шул иҫәптән 19018 кеше киҙеүгә ҡаршы прививка эшләткән.

Күп йыллыҡ күҙәтеүҙәр һөҙөмтәһендә, табиптар киҙеү эпидемияһын 2020 йылдың ғинуар-мартына күҙаллай. Ул уртаса көсөргәнештә, ҡатнаш этимологиялы буласаҡ, йәғни вирустың өс штаммы ла күҙәтеләсәк. Галина Яковлевна белдереүенсә, былтыр киҙеү осоро 7 аҙна дауам иткән һәм барлығы 67672 кеше (6,5 процент) сирләгән. Балалар - 35752 (15 процент). Сирләүселәрҙең дөйөм һанынан 0,9 процент ҡына прививка эшләтеүселәргә тура килә. Сығышы һуңында Галина Пермина халыҡты иммунлаштырыу барышын контролгә алыу зарурлығын билдәләне, ә Өлфәт Мостафин бының өсөн тейешле эшмәкәрлек алып барыу бурысын йөкмәтте.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

## ӨМӘЛӘР БАШЛАНДЫ!

**Бөгөн Өфөлә беренсе көҙгө өмә ойоштороласаҡ, унда теләгән һәр кем ҡатнаша ала. Икенсе дөйөм ҡала өмәһе 5 октябргә билдәләнгән.**

Дөйөм ҡала өмәһе 10 сентябрҙә башланған биләмәне санитар таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса көҙгө айлыҡ барышында үткәрелә.14 октябргә тиклем баш ҡалала юлдарҙы, тротуарҙарҙы, ҡоймаларҙы ремонтлау, урамдарҙы һәм ихаталарҙы йыйыштырыу, гараж кооперативтары һәм баҡсасылыҡ ширкәттәре биләмәләрен сүп-сарҙан таҙартыу эштәре алып барыла. Өфө хакимиәте предприятиелар һәм ойошмалар етәкселәренә беркетелгән биләмәләрҙә, шул иҫәптән тротуарҙарҙы һәм газондарҙы тәртипкә килтерергә ҡуша. Ҡала биләмәләрен тәртипкә килтереү буйынса төп эш торлаҡ-коммуналь комплекс хеҙмәткәрҙәре иңенә ята. Ләкин тыуған ҡалаһын төҙөкләндереүгә һәр кем үҙ өлөшөн индерә ала.

## СЫУАҠ КӨН БӨТТӨ

**Башҡортостанда "әбейҙәр сыуағы"на алмашҡа ямғырлы һәм көҙгө һалҡын һауа торошо килде. Синоптиктарҙың яҡынса фаразы буйынса, алдағы ике аҙнала һауа температураһы көндөҙ +5, +8, төндә 0,+2 градус була.**

Көн һайын тиерлек ямғыр яуыуы көтөлә. 22-һенә тиклем көндөҙгө сәғәттәрҙә йылы һауа торошо һаҡлана: +15, +8 градус, төндә 0, +9 градус. 23 сентябрҙән 26-һына ҡәҙәр һиҙелерлек һалҡынайта: көндөҙ +4, +8, төндә 0, +3 градус. Сентябрь аҙағында көҙ көнө кеүек һалҡын һәм ямғырлы була, урыны менән ҡырау һәм епшек ҡар көтөлә.

World-Weather фаразына ярашлы, көҙҙөң икенсе айы - октябрь - болотло һәм ямғырлы була. Һауа температураһы көндөҙ уртаса 9-10, төндә 4-5 градус тәшкил итә. Октябрҙең 20-ләрендә һиҙелерлек һалҡынайта: көндөҙ термометр бағанаһы +4 градусҡаса, төндә иһә -2 градусҡа тиклем төшә. Ай аҙағында - 29 октябрҙә республикала тәүге ҡар япмаһы ятыр тип көтөлә.

## ҠАҒИҘӘ БОҘМА!

**16 сентябрҙә Башҡортостанда "Бурыслы" иҫкәртеү операцияһы башланды.**

Республика Дәүләт автоинспекцияһының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, сараның төп маҡсаты - ҡағиҙә боҙоусыларға һалынған штрафтарҙы ваҡытында түләү кәрәклеге хаҡында иҫкәртеү. Штрафты административ хоҡуҡ боҙоу тураһында ҡарар үҙ көсөнә ингәндән һуң 60 көн эсендә түләмәгән өсөн гәйепле кеше штраф тәғәйенләнә йәки ул 15 тәүлеккә ҡулға алына, йә иһә 50 сәғәткә тиклем мәжбүри эштәргә йәлеп ителә. Ә бына штрафты 20 көн эсендә түләгән осраҡта, штраф суммаһынан 50% түләү мөмкинлеге бар. ЮХХДИ-һы хеҙмәткәрҙәре операция барышында водителдәрҙең бурысы бармы, юҡмы икәнен тикшерә.

БАШ ҠАЛАМ



## ИСЕМЕНӘ ЕСЕМЕ ТАП КИЛҺЕН!

**Халыҡтың нормаль, таҙа һәм төҙөк территорияла, уңайлы мөхиттә йәшәүен тәьмин итеү маҡсатында быйыл республикала һәм баш ҡалала ихата территорияларын комплекслы төҙөкләндереү буйынса башҡа проекттар менән бер рәттән "Башҡорт ихаталары" проектының да тормошҡа ашырыла башлауы төрлөсә ҡабул ителде. Ҡыуаныусылар ҙа булды, ышанмаусылар ҙа табылды. Ләкин уның етдилеген 2024 йылға тиклем күҙалланыуы, күп фатирлы йорттар булған барлыҡ райондарға ла барып етергә тейешлеге, программаның шәхсән Республика Башлығының контролендә булыуы раҫланы.**

Программаны финанслауҙың 94 проценты - республика бюджетынан, 5 процентының муниципалитеттан, 1 процентының күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәрҙең кесәһенән сығыуы ла бик яҡшы тип уйлайым. Сөнки, бер яҡтан, граждандар үҙҙәренең көсө менән генә ихата территорияһын төҙөкләндерә алмаҫы көн кеүек асыҡ, икенсе яҡтан, әгәр ремонтҡа үҙ аҡсаң да инеп китә икән, тимәк, минеке, тигән фекер нығынып, булдырылғанға һаҡсыл ҡараш уянасаҡ. Ә программаға ярашлы, мотлаҡ рәүештә хәүефһеҙ резина ҡатламы менән көпләнгән балалар майҙансығы, спорт майҙансығы, автомобилдәргә парковкалау урыны, мәғлүмәт стенды, урамдарҙы яҡтыртыу сығанаҡтары, видеокүҙәтеү, бәләкәй архитектура формалары булырға тейеш. Хатта эттәргә йөрөтеү өсөн махсус урындар ҙа эшләтергә мөмкин. Ошо мотлаҡ башҡарылырға тейешле эштәрҙән тыш, әгәр ихаталаштар менән һөйләшеп, бер фекергә килеп, тағы ла нимәләр эшләтергә теләһәң, ул пункттарҙы ла сметаға индерергә була. Был осраҡта инде сығымдар граждандар иҫәбенә башҡарыла.

Әйткәндәй, бөгөн сифатҡа ҙур иғтибар бирелә. Подрядсы ары-бирле эшләнә лә ҡасты түгел, уларҙың эшен махсус комиссия ҡабул итә һәм ҡабул итеү документтарында мотлаҡ күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәрҙең вәкәләтле вәкиленең ҡултамғаһы ла булырға тейеш. Әгәр ул, нимә менәндер риза булмаған граждандарҙың талабы буйынса, ҡултамғаһын ҡуймай икән, тимәк, объект тапшырылмаған. Шулай уҡ, гарантия мөҙҙәте өс йыл тип билдәләнгән. Ошо ваҡыт эсендә ниндәйҙер етешһеҙлек асыҡланһа, подрядсы уны үҙенең иҫәбенә ҡабаттан эшләргә тейеш.

Ҡыҫҡаһы, был программа бөгөн бик уңышлы һәм файҙалы. Бары тик граждандарға әүҙемерәк булырға, үҙҙәренең уңайлы тормошон булдырыуҙа үҙ өлөштәрен индерергә генә кәрәк.

**Лүзиә ХӘЛИЛОВА.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Барбарис

❖ Барбарис емеше ҡан баҫымын төшөрөү, ҡан тамырҙарын һәм йөрәк мускулдарын нығытыу, склерозды дауалау өсөн ҡулланалар. 1 балғалаҡ туралған барбарис емешенә 1 балғалаҡ бал, 1 стакан ҡайнар һыу өҫтәргә, 40 минут төнәтергә һәм эсергә. Көнөнә бер нисә тапҡыр эсергә кәрәк булыр. Дауаланыу курсы - 1 ай. 7 көн ял иткәндән һуң курсты тағы ҡабатларға.

### Ҡарабойҙай

❖ Ҡарабойҙай төнәтмәһе ҡан тамырҙарын нығыта, иммунитетты нығыта, организмды шлактарҙан таҙарта. Ҡарабойҙай сәскәләре һәм вакланған һаламын бер тигеҙ күләмдә алып болғатырға, 1 балғалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Һыуынғас һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 40-ар мл (балаларға - 20-шәр мл) эсергә. Көн һайын яңы төнәтмә әҙерләргә. Дауаланыу курсы - 1 ай. 3 аҙна ял иткәндән һуң, 3 ай буйына араларында 3-әр аҙна ял ойоштороп, 21-әр көн дауаланырға. 90 көндән тағы ҡабатларға.

### Һары һыу ауырыуы

❖ Һары һыу ауырыуын (асцит) петрушка дауалай. 800 грамм петрушканы эмаль һауытҡа һалып, 1 литр һөт ҡойорға, ҡайнау хәленә еткерергә, һөҙөргә һәм сәғәт һайын 1-2 ҡалаҡ эсергә. Көн һайын яңынан әҙерләргә.

### Һытҡы

❖ Һытҡыны дауалау өсөн: ваҡ диңгеҙ тоҙона ҡаймаҡ ҡушырға һәм алдан таҙартылған тиргә һөртөргә. 10-20 минуттан һалҡын һыу менән йыуырға.

### Сөйәл

❖ 2 лимон һабығын ваҡлап, быяла һауытҡа һалып, ярты стакан 30 процентлы һеркә ҡойорға, 10 көн төнәтергә, болғап торорға. Һөҙөргә һәм көнөнә бер нисә тапҡыр сөйәлгә һөртөргә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Һуңғы йылдарҙа тәбиғәт тә беҙҙе йә дауылдары, йә һыу баҫыуҙары, йә эҫеһе, йә һыуығы менән һынай. Миҫалға, бер нисә йыл элекке бар донъяны яндырып, оло хафаға һалған эҫелекте генә алайыҡ.*



*ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!*



# БАШҠОРТ БАЛАҪЫ

"Йондоҙ" орнаменты тураһында һөйләгәндә тағы бер биҙәк тураһында әйтеп китергә кәрәк. Ул - осло яғы менән бер-береһенә тоташҡан дүрт үк башағынан яһалған үҙенсәлекле фигура. Тәҙәлөшө йәһәтенән диагональ менән бүленгән дүрткел һәм осло яғы сығып торған ҡуш өсмөйөштәрҙән ғибәрәт.

Балаҫта төрлө төҫтәге 8 ошондай биҙәк, горизонталь үҙәктә 3 ромб һәм периметр буйынса өсмөйөштәр иркен урынлаша ала. Ерлек төҫөндәге үк ҡаймаға бер-береһенә тоташҡан ромбтар йәки ҙур булмаған йондоҙҙар һуғыла. Бер төҫтән (ҡыҙыл, йәшел, күк, һары) торған ошо биҙәктә "үк"тарҙы бәләкәй ромб (3х3 дүрткел) формаһындағы төп фигураға контраст булған төҫтәге шахматлы орнамент байытып тора. Төрлө төҫтәге мозаика ромб һәм өсмөйөштәрҙең араһын да тултыра.



*Көньяҡ-көнбайыш төбәгенә хас балаҫтарҙағы орнаменттарҙың үҙенсәлекле деталдәре: а - үк башағынан фигура; йондоҙ; ҡапма-ҡаршы киҫелешкән сәскә биҙәк; 5 ромблы биҙәк; "күбәләк"; сәскә биҙәктәре; б - ҡатмарлаштырылған элементтар; в - мөгөҙгә оҡшатып яһалған биҙәктәр; г - традицион элементтарҙың йәлап ҡатмарлашыуы; д - өсмөйөштәрҙән "гармун"; ҡайма өлгөләре; е - балаҫтың тар яғын биҙәгән киң ҡаймалар өлгөләре*

Өсмөйөштәрҙән һәм трапециянан яһалған үҙенсәлекле "гармун" биҙәге айырым орнамент булып тора ала. Балаҫтың үҙәген үҙ-ара киҫешкән диагоналдәр барлыҡҡа килтергән өсмөйөштәргә бүленгән ромб биҙәй. Ҡайһы бер балаҫтарҙа улар эрерәк, ҡайһылары ваҡыраҡ һәм башҡа элементтар, йышыраҡ ромбтар менән сиратлашып килә.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# ҺИНЕ НИ БОРСОЙ?

## "Инцидент"ҡа яҙып ебәр!

**Радий Хәбиров БР Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы итеп тәғәйенләнгәндән һуң граждандарҙы борсоған проблемаларҙы тиҙ хәл итеү маҡсатында социаль селтәрҙәрҙә "Инцидент" системаһы булдырылғайны. Ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә "Инцидент" ун меңдән ашыу гражданға көнүҙәк проблемаларын, яңыларын да, быға тиклем власть ҡулы етмәгәндәрен дә, хәл итергә ярҙамлашҡан.**

### Был ниндәй программа?

Ул компьютер программаһы, социаль селтәрҙәрҙән проблемаларҙы һәм халыҡтың зарланыуын эҙләгән яһалма интеллект. Ысынында, ул һәр фатирҙа булған ҙур "ҡолаҡ", уның аша туранантура республика етәксеһенә үҙенде борсоған хәбәренде, йомошонҙо еткерергә була. Власть вәкилдәре өсөн был программа халыҡ аныҡ ҡына нимә талап итә, нимә теләй икәнен белер өсөн кәрәк. Мәҫәлән, был "ҡолаҡ" аша тәү сиратта асфальтты ҡайҙа һалырға, ҡайһы урынды сүп-сарҙан таҙартырға, ҡайһы дауаханаға ниндәй табип ялларға, үҙ эшен атҡармаған ҡайһы арамҙа чиновникты эшенән бушатырға кәрәклеген белергә мөмкин. Былар тураһында халыҡтан да яҡшыраҡ кем һөйләр?



### Система нисек эшләй?

Яһалма интеллект социаль селтәрҙәрҙәге постарҙа һәм комментарийҙарҙа проблемалар, зарланыуҙар табып, "диспетчер"ға еткерә. Был БР Башлығы Хакимиәтенең эш төркөмө хеҙмәткәрҙәре, улар ял көндәрһеҙ һәм тәүлек әйләнәһенә тиерлек эшләй, "инцидент"тарҙы райондар йәки профилле ведомстволар буйлап тарата. "Инцидент"ты алғас, был өлкәгә яуаплы чиновниктың ошо мәсьәләгә төшөнөү һәм ул нисек хәл ителәсәге тураһында яуап биреү өсөн бер тәүлек ваҡыты бар. Ҡайһы саҡта, ысынлап та, бындай ҡыҫҡа ваҡыт эсендә мәсьәләне хәл итеп булмай. Мәҫәлән, ауыр юл участкаһын тиҙ генә ремонтлап ҡуйыу мөмкин түгел, быны өсөн кәрәкле аҡса табыу һәм конкурс үткәреү кәрәк. Ул саҡта кешегә "Хөрмәтле Фәлән Фәләнович, хәҙер үк эшләй алмайбыҙ, әммә сентябрь аҙағына барыһы ла әҙер буласаҡ", тип яуап бирәләр. Бындай һорауҙар контролдән төшмәй, яуаплы чиновниктан сентябрь аҙағында мотлаҡ ошо мәсьәләнең хәл ителеше буйынса отчет талап ителәсәк.

### Программа мәсьәләне күрһен өсөн нимә эшләргә?

Әлегә "Инцидент" бөтә зарланыуҙарҙы һәм мөрәжәғәттәрҙе лә "күреп" бөтә алмай. Ҡайһы саҡта кешеләр робот һәм модераторҙар иғтибарын йәлеп итеүсе һүҙ тип иҫәпләп, социаль селтәрҙә #инцидент хештегын ҡуя. Был дөрөҫ түгел, сөнки система хештегтарҙы түгел, ә яҙылғандың йөкмәткеһен иғтибар үҙәгенә ала. "Инцидент" һеҙҙең пост йәки комментарийҙы һайлаһын өсөн ул тәү сиратта социаль әһәмиәтле, икенсенән, күптәрҙе борсоған проблема тураһында булырға тейеш.

Миҫал өсөн:

- "Өфөлә ҡасан юлдарҙы төҙәкләндерәсәктәр?" йәки "Минең ҡоймам ҡыйшайҙы, ни эшләргә?" тигән хәбәрҙәрҙе робот дөйөм һәм шәхси осраҡ, тип иҫәпләп үткәреп ебәрә.
- "Ивановка ауылында бер метр асфальт та ҡалманы" йәки "Балалар баҡсаһының ҡоймаһы ҡыйшайған, ә унда йөҙ бала йөрөй" тип яҙһаң, был мәғлүмәтте система күрәсәк. Сөнки һүҙ аныҡ территория проблемаһы тураһында бара һәм проблема балалар хәүефһеҙлегенә ҡағыла.

### Бар мөрәжәғәттәр ҙә күренәсәкме?

БР Башлығы Хакимиәте эргәһендәге эш төркөмө етәксеһе Елена Прочаковская хәбәр итеүенсә, "Инцидент"тың һыңары буласаҡ яңы портал әлеге ваҡытта һынауҙар үтә. Ул "Инцидент+" тип аталасаҡ һәм уның ярҙамында республикала йәшәгән һәр кем төрлө тема буйынса тиерлек хат яҙып ебәрә аласаҡ. Портал көҙгә ҡарай киң йәмәғәтселеккә сығыр, тип көтөлә.

### Ни өсөн чиновниктар "Инцидент"ҡа ҡолаҡ һала?

Ай һайын "Инцидент" буйынса эш һөҙөмтәләренә ҡарап, ҡала һәм райондар рейтингы төҙөлә. Унда барыһы ла иҫәпкә алына: эш тиҙлеге, яуаптар сифаты, ҡайтарылған яуаптан граждандар ҡәнәғәтме-юҡмы икәнлеге һ.б. Рейтинг Радий Хәбиров өҫтәлөнә һәм уның Хакимиәте өҫтәлөнә һалына. Насар күрһәткестәр артынан һәр ваҡыт тикшереүҙәр һәм етди һығымталар килә. Район хакимиәттәре башлыҡтары хәҙер мутлашыуҙың ауыр эҙемтәләргә килтереүен белә. Быһың мәғәнәһе лә юҡ, сөнки халыҡ тағы ла "Инцидент"ҡа дөрөҫөн яҙып, мөрәжәғәт итәсәк.

### Ҡағыҙға яҙырға ярамаймы?

Ҡағыҙға ла яҙырға ярай, әммә яуап биреүҙе түҙемле генә көтөп торорға кәрәк буласаҡ. "Граждандар мөрәжәғәттәре тураһында"ғы законға ярашлы, чиновниктар 30 көн эсендә һеҙгә яуап бирергә тейеш.

### Тағы ҡайҙа зарыңды еткерергә?

- Бөтә ведомстволарға "Электронная приемная" сервисы letters.openrepublic.ru аша хат ебәреп була. Уның аша ебәрелгән бөтә мөрәжәғәттәр ҙә рәсми булып иҫәпләнә, шуға күрә чиновниктар бер ай эсендә уға мотлаҡ иғтибар итергә һәм яуап бирергә тейеш.
- Юлдағы соҡорҙар тураһында "Дорожный эксперт" ҡушымтаһы аша хәбәр итергә була. Был сервис Радий Хәбиров тәҡдиме менән Транспорт һәм дәүләт хужалығы буйынса дәүләт комитеты тарафынан төҙөлгән. Был осраҡта юлдағы соҡорҙо фотоға төшөрөп, картала урынын билдәләп ебәрәһегеҙ. Яуаплы кешеләр заявканы күрә, өс көн эсендә ремонтлап ҡуйыуҙы хәстәрләргә тейештәр. Ғәмәлдә, әлегә мөрәжәғәт итеүселәр бик күп, шуға эштәр бер ни тиклем тотҡарлыҡ менән бара.
- Тыйылған алкоголь һатыуға ҡаршы "АнтиКонтрафактАлко" мобиль ҡушымтаһы аша мөрәжәғәт итергә кәрәк. Акциз маркаһын сканер аша үткәргәндә ҡушымта һеҙгә алкоголле эсемлек тураһында мәғлүмәт сығара: күләме, ниндәй магазинда һатыла. Ошо уҡ ҡушымта аша рәхсәтһеҙ продукция менән һатыу итеүселәргә лә ялыу яҙырға була.
- Газонда ҡалдырылған автомобиль хужаларына штраф һалыу эшен райондың административ комиссиялары атҡара. Уларға ялыу яҙыу өсөн тейешһеҙ урында ҡалдырылған машинаны фотоға йәки видеоға төшөрөп, һәр комиссияның интернеттағы битендә ҡуйылған бланкыны тултырып, почта аша ебәрергә кәрәк.

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ЫҢҒАЙҘЫ ЛА КҮРӘЙЕК!

**Минең "Бәхеткә ҡаҫҡандар"тигән сәхнә әҫәремдә әбей менән бабайҙың йортон һыу баҫа. Быны Туфан һыуы ҡалҡыуы, Ахырызаман етеүе тип аңлаған әбей үҙ донъяларында ятып үлеүҙе хуп күрә һәм быға бабайын да күндерә...**

Был - негатив фекерләү, һәр күренештең тик насар яғын күреү бәләһе. Беҙ тормоштағы бәләкәй генә уңышһыҙлыҡты, кире күренеште лә ошо әбей һымаҡ Туфан һыуындай күреп, башҡаларҙы ла ошоға ышандырырға тырышабыҙ. Ә бит, күптәрҙең ҡарашынса, хатта һәр бер кире тип нарыҡланған күренештең дә ыңғай яғы була. Һәр бер негативтың кире яғында позитив, ыңғай һыҙат йәшәй. Беҙгә ана шуны ла күреп өйрәнергә кәрәк.

Һабаҡ ала торған ваҡиғалар булып тора. Һуңғы йылдарҙа тәбиғәт тә беҙҙе йә дауылдары, йә һыу баҫыуҙары, йә эҫеһе, йә һыуығы менән һынай. Миҫалға, бер нисә йыл элекке бар донъяны яндырып, оло хафаға һалған эҫелекте генә алайыҡ. Минеңсә, Аллаһы Тәғәлә ергә ошондай көндәрҙе ебәреп, кешеләргә алда торған ҙур һәләкәттән иҫкәртергә итәләр, кешеләр бындай климатҡа яйлап өйрәнә торһон да, алдағы йылдарҙағы тәбиғәт катаклизмдарын еңел үткәрһен, тиҙер. Нисек кенә булмаһын, һәр фажиғә, һәләкәт, һәр күңелһеҙ хәлдән һуң яҡты көндәр, тормошоҙҙа яҡты һыҙаттар ҙа була икәнен онотмайыҡ. Зарланмайыҡ...

**Таңсулпан ҒАРИПОВА,**
**яҙыусы.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

8

# Ғаилә-ҡәлғәм

21-27 сентябрь (һарысай) 2019 йыл

№38 (872)

ҒАИЛӘ МӘКТӘБЕ

# ӘСӘЙ БУЛЫП ЭШЛӘЙЕМ...



**Баланың киләсәге - ғаилә тәрбиәһенән тора, тигән фекерҙә был йәш ғаилә. Өфө районы Шамонин ауылында йәшәүсе Азамат Мөхәмәтнур улы менән Ләлә Ишҡәле ҡыҙы Вәхитовтар менән тыныштырмаҡсыбыҙ бөгөн. Уларҙың ғаиләһендә ете йәшлек Нәркәс, ике йәшлек Наҙгөл исемле ҡыҙҙар, биш йәшлек Урал атлы егет үҫә. Йорт хужабикәһе Ләлә Вәхитова менән тәрбиә, уларҙың ғаиләһенә генә хас йолалар тураһында әңгәмәләшеп алдыҡ.**

**➔ Һәр ғаиләнең үҙенә генә хас тәрбиә ысулдары була. Һеҙҙең ғаиләгеҙҙә күберәк нимәгә иғтибар ителә?**

- Бала тәрбиәләү, ғөмүмән, бик яуаплы эш. Һәм ғаилә тәрбиәһе кешенең артабан ниндәй ҡиммәттәргә өҫтөнлөк биреп йәшәйәсәгендә, ниндәй шәхес булып китеүендә ҙур роль уйнай тип уйлайым. Шуға ла тәрбиә эшенә битараф булырға ярамай. Мин балалар менән өйҙә күберәк булһам да, атайҙары менән был эшкә тигеҙ ҡарайбыҙ һәм күберәк үҙебеҙ яҡшы өлгө булырға тырышабыҙ. Сөнки ниндәй генә ысулдар ҡулланма, ҡайҙа ғына уҡытма, балаң холҡо, ҡылығы менән барыбер үҙеңә оҡшаясаҡ. Ояһында ни күрһә, ти бит халыҡ, осҡанында ла шул булыр.

Икенсенән, үҙебеҙҙе нисек тәрбиәләгәндәр, беҙ ҙә ошо нигеҙҙәргә таянабыҙ, тип иҫәпләйем. Ҡыҙыҡ инде: Азамат өс малай араһында иң өлкәне, мин туғыҙ бала араһында етенсе бала. Шаяртып та, ысынлап та әйткәндә, ул - идара итергә, бойоророға ярата, мин ҡушҡанды тыңлап өйрәнгәнмен. Ғаиләлә үҙ-ара аңлашып йәшәүҙең бар сере лә ошонда. Беҙ холоҡтарыбыҙ һәм икенсе яртыңа булған талаптарыбыҙ менән тап килгәнбеҙ. "Һин - минең өләсәйемә оҡшағанһың, сабыр холоҡло, тыйнаҡ, аҡыллы ҡатынһың", - ти ирем миңә. Ә мин уны Әхәт тигән ағайыма оҡшатам. Уларҙың ғаиләһендә: "Атайығыҙ нимә әйтер, атайығыҙ ҡайтһын, атайығыҙҙан һорарбыҙ", - тип атай абруйы юғары икәнен гел һыҙыҡ өҫтөнә ала ине. Ошо өлгөнө үҙебеҙҙең ғаиләбеҙгә күсергәнмендер, тип уйлайым. Ғаиләлә атай - идарасы, әсәй уның ҡушҡандарын үтәүсе, тип ҡабул иткәнмен бала саҡтан. Азаматтың ике педагогик белеме бар һәм был уға тәрбиә эшендә ныҡ ярҙам итә, ул ысын мәғәнәһендә балаларға дөрөҫ юл күрһәтә алған атайҙар рәтенән. Олатаһы, өләсәһе, әсәһе уҡытыусы булып, ул ошо һөнәрҙе үҙ иткән өсөнсө быуын булһа ла, үҙ теләге менән башҡа йүнәлештә эшләй. Үҙем дә башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетын тамамлағанмын.

**➔ Һеҙҙең балаларығыҙ башҡорт телендә үткән саралар уртаһында, йырлай ҙа, бейей ҙә, шиғыр ҙа һөйләй. Тимәк, бында телсе әсәйҙең йоғонтоһо күберәк?**

- Милли рухты нығытыуҙың әлегәсә тәьҫирле башҡа ысулдарын мин белмәйем. Шуға ла тел белгесе булмаһам да балалар менән башҡортса һөйләшер, уларға туған телдә бишек йырҙары көйләр, башҡортса иркәләп өндәшер инем. Өйҙә мотлаҡ башҡортса һөйләшергә кәрәк икәнлекте балалар яҡшы белә. Ҡунаҡҡа килгән өлкәндәр менән дә башҡортса аралашалар. Әкиәттәр уҡыйбыҙ, башҡорт уйындарын уйнарға тырышабыҙ. Өлкән баланды тәрбиәләһәң, ҡалғандарын ул тәрбиәләй, тигәне лә дөрөҫ. Нәркәскә, һин - апай, туғандарың һиңә ҡарап өйрәнә, тип әйтеп кенә торабыҙ, ул был йәһәттән ҙур ярҙамсыбыҙ. Ә рус телендә, өйрәтмәһәң дә, һөйләшә улар. Сөнки йәшәгән мөхит русса аралаша, балалар баҡсаһы, урамдағы тиҫтерҙәре, телевизор, радио...

**➔ Ауыл ерлегендә йәшәүегеҙҙең бала тәрбиәләгәндә ыңғай яҡтары бармы?**

-Һис шикһеҙ. Ҡалала һәр кем фатирына бикләнеп ғүмер кисерә. Ә беҙ бында күрше-күлән, башҡа ғаиләләр менән аралашабыҙ, балалар баҡсаһы, мәктәп тә үҙенә күрә милләттәштәрҙе берләштерә, таныштыра торған социаль үҙәктәр. Ата-әсәләре аралашҡас, балалар ҙа үҙ-ара һөйләшеп йөрөй, был уларҙың социаль яҡтан үҫешенә ыңғай йоғонто яһай.

Унан һуң, хеҙмәт тәрбиәһе тигән әйбер ҙә бар бит әле. Аталары менән бергә картуф сәсеп, йәй буйына баҡсаға һыу һибешә балалар. Быйыл ике йәшлек Наҙгөлөбөҙ ҙә картуф алышып йөрөнө. Эште бер ҡасан да ҡушып эшләтмәйбеҙ, үҙебеҙгә ҡушылып эшләйҙәр. "Мин үҙем, әсәй", тип торған балама бер ҡасан да, юҡ, тимәйем, тыймайым. Шул саҡта улар тиҙерәк үҙаллылыҡҡа өйрәнә. Баланы үҙең кейендерһәң - тиҙерәк, үҙең ашатһаң, иҙәнең таҙараҡ була, әлбиттә, тик аҙаҡтан уның өсөн үҙең йүгергең килмәһә, бала саҡтан күнелен ҡыймаҫҡа кәрәк.

**➔ Бер-берегеҙҙе яҡынайтҡан, дуҫлаштырған ғаилә йолалары бармы?**

- Аталары ҡайтып килгәнен күрһәк, күмәкләп ишек төбөндә ҡаршы алабыҙ, ирем өсөн дә, беҙҙең өсөн дә ҡыуаныс был. Һәр башҡорт тәбиғәткә ынтыла инде, һәр миҙгелдә ҡырға сығып, көс-ғәйрәт туплап ҡайтабыҙ. Торатауға күтәрелдек быйыл. Наҙгөлдән башҡалары үҙе менеп, үҙе төштө. Бейек тауға артылыу киләсәктә менәсәк үрҙәргә ишара булды. Өфөгә ҡайтҡансы һөйләшеп ҡайттыҡ балалар менән, сабырлығың, тырышлығың булһа, бейек тауға ла менеп була, шуның кеүек һәр эште башҡарғанда ауыр тойола, әммә һөҙөмтәһе ҡыуандыра.

Өлкәндәрҙең хәлен белешергә өйрәтәбеҙ. Йыраҡтағылары менән телефондан һөйләшәләр, видеотрансляциялар ҙа ойоштороп алабыҙ. Үҙебеҙҙән олораҡ күршеләргә лә, хәлдәрен белешеп сыҡ, тип индереп ебәрәм. Үҙҙәренә лә бер яҡтан - ҡыҙыҡ, яуаплылыҡ та. Ниндәйҙер мөһим эш башҡарған кеүек ҡайтып ингән булалар. Һәм, әлбиттә, йыл һайын башҡорт Ҡыш бабайын саҡырабыҙ.

**➔ Бала менән өйҙә генә ултырған ҡатын-ҡыҙға йәмғиәттә ҡараш төрлө, бәлки, бында бөгөнгө гүзәл заттың карьера яһарға, матди яҡтан да азат булырға ынтылыуының да кире йоғонтоһо барҙыр. Ир ҡатыны һәм әсәй булыуы еңелме?**

- Бәлки, хаталанамдыр, әммә балалар үҫкән мәлдә карьера эшләп булмайҙыр ул. Икеһе лә яуаплы был ике өлкәне бер юлы алып барып булмайҙыр, тип уйлайым. Ә бына милләтеңә лайыҡлы улдар, ҡыҙҙар үҫтергәс, карьера тураһында ла уйларға мөмкин, эш бит ҡасмай, ә баланың бала сағы бер мәл генә. Карьера буйлап үрләгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың кухняла сәй эсеп ултырғанда, мин - бәхетле әсәй, мин - бәхетле ҡатын, тип әйткәнен ишеткәнем юҡ әле.

Тик әсәй генә булып "эшләгән" кешенең көндәре күңелһеҙ үтә тимәҫ инем. Өйҙә ултырыу, балалар менән булыу һинең шәхси үҫешеңә аяҡ сала тип уйлағандар ҙа хаталана. Бөгөн мөмкинлектәр заманы, барыһы ла үҙеңдән тора.

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

УЛЫМ, ҺИҢӘ ӘЙТӘМ...



## "ҒӘФҮ ИТЕГЕҘ"

### Был һүҙҙең дә үҙ тылсымы бар

**"Атайһыҙ ул тәрбиәләүе, әсәйһеҙ ҡыҙ тәрбиәләүе ауыр" тигәндәре дөрөҫтөр. Мин дә яңғыҙ әсә. Улым, бәләкәй булһа ла, үҙенең тиҫкәре холҡо менән теңкәмә тейә. Иң ауыры - үҙ ғәйебен танымаймы, әллә танырға теләмәйме - ғәфү үтенмәй. Ғәфү үтен, тиһәң, турһайып тик тора. Сәғәттәр буйы мөйөштә торһа тора, ғәфү үтенмәй. Ошондай әҙәпкә нисек өйрәтәйем икән?**

**Һеҙҙең гәзитегеҙҙе даими алдырып уҡыусы Зөмәйрә.**

Кешенең үҙ ғәйебен таныуы менән "ғәфү итегеҙ" тип әйтеүе араһында айырма ҙур. Улың, бәлки, ғәйебен таныйҙыр, үкенәлер, әммә был һүҙҙе әйтмәйҙер. Әйтмәүе бик тә ихтимал. Уның әллә ни ҙур ғәйебе юҡ. Сөнки кеше өсөн иң ауыры - ғәйебеңде танығандан һуң, уны башҡалар алдында ҡысҡырып әйтеү. Бөтөн кеше лә быны булдыра алмай. Балаға беҙ бәләкәйҙән изгелек өсөн "рәхмәт" әйтергә өйрәтәбеҙ. Әммә ул ихлас булырға тейеш. Шиғыр ятлатҡан һымаҡ ҡына ятлатып әйттереү дөрөҫ түгел. Ни өсөн "рәхмәт" әйтә ул, был тылсымлы һүҙ нимә аңлата - ошоно аңламаһа, һүҙҙең тылсымы бөтә. Шуның һымаҡ "ғәфү итегеҙ" тигән һүҙ ҙә ихлас әйтелмәһә, ғәҙәткә әйләнеп китеп, аҙым һайын әйтелә барыуы ихтимал һәм торабара бала ғәйебен йәшереү өсөн дә, хатта, был һүҙҙең кешегә ысынлап та тылсым кеүек тәьҫир итеүен белеп ҡалып, ярамһаҡланыу-ялағайланыу, күҙ йәшереү өсөн дә ҡуллана башлауы ихтимал. Баланың үҙ ғәйебен таныуын уның тотошонан, күҙ ҡарашынан аңлау һәм ғәфү итеү әсә кеше яғынан иҫ китмәле ҙур ташлама һәм сауап була. Әсәләргә бала күңелен уның үҙенән алда аңлау, үтә күреү һәләте бирелгән. Ошо урында бер миҫал килтереп китеү урынлы булыр тип уйлайым.

Беренсе синыфта уҡый ғына башлаған таныш бала мине урамда осратып, ошолайтып һаулыҡ һорашты:

- Һаумыһығыҙ!

- Һаумы, балам. Һаулыҡ һорашып үтеүеңә рәхмәт.

- Үҙегеҙгә лә рәхмәт. Һау булығыҙ. Тағы килегеҙ.

Баланы әсәһе әҙәпле һөйләшергә, тылсымлы һүҙҙәр әйтергә өйрәткән. Уныһы яҡшы. Әммә ихлас итеп, аңлап, кәрәк урында әйтергә кәрәклеген аңлатмаған. Бала әсә әйткәндәрҙе шиғыр ятлаған кеүек яттан ғына әйтеп китте.

"Ғәфү итегеҙ" тигән һүҙҙе иһә әйтеүҙе талап итергә ярамай, ә аҡрынлап, үҙең өлгө күрһәтеп, ысынлап та, яңылыш эшләгән оло ғәйеп булғанда ғына әйтергә кәрәклеген аңлатырға кәрәк. Ғәйебеңде, ысынлап та, аңлап, ихлас ғәфү үтенеү аҡрынлап килә торған ғәҙәт ул.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ

# ИРҘӘР ИР БУЛЫП ҠАЛҺЫН,

## йәки Улымдың һорауҙарына яуаптар



**Әүәл, атай, илдә батыр исемен алған ирҙәр генә данланған, тиҙәр. Хәҙер килеп, ир-егеттәрҙе йылына бер тапҡыр маҡтау-данлау көнө йолаһын атҡарыу үҙе үк бер яһалмалылыҡ билдәһе түгелме ни?**

Был мәсьәләгә нисек ҡарайһың бит, улым. Миҙалдың да алғы яғы ла, кире яғы ла бар. Ысынлап та, борон ҡатын-ҡыҙҙы ла, ир-атты ла махсус рәүештә хөрмәтләү көнө булмаған, күп илдәрҙә хәҙерге заманда ла быңдай байрамдар ойоштороуға бер ниндәй ҙә ихтыяж юҡ. Беҙҙә күп йылдар буйына Совет Армияһын данлауға бағышланған махсус көн бар ине, ул ҡәҙимге эш көнө булды. Совет иле менән бергә уның армияһының исеме лә тарихи төшөнсә генә булып ҡалыуына ҡарамаҫтан, 23 февраль Рәсәйҙә Ватанды һаҡлаусылар көнө атамаһын алып, дәүләт байрамы кимәленә күтәрелде. Әрме хеҙмәтен башлыса ирҙәр үтәгәс, ул беҙҙең аңыбыҙҙа ла, йәшәйешебеҙҙә лә күптән инде ир-атты хөрмәтләү көнө булып нығынды. Шуныһы ҡыҙыҡ, хәрби хеҙмәткә бер генә ҡағылышы булмаған заттарыбыҙ ҙа ошо көндә ҡотлауҙар ҡабул итә. Бәлки, быныһы ла хаҡлылыр: гүзәл заттарыбыҙ тик ҡатын-ҡыҙ булғаны өсөн хөрмәт ителгәс, ирҙәрҙе маҡтауға лайыҡлы-лайыҡһыҙҙарға бүлеү һис тә килешмәҫ ине. Ил һаҡсылары көнөнөң ирҙәр көнөнә әйләнеүендә тик беҙҙең менталитетҡа хас логика ла бар ул: ҡатын-ҡыҙҙар көнө булғас, ни эшләп әле ирҙәр өсөн махсус байрам булмаҫҡа тейеш! Был үҙенә күрә компенсация, йәғни ҡайтарма алыуға тиң инде. Ил һаҡсыһы уҡ булмаһа ла, ғаилә һаҡсыһы тигән исеме бар бит әле ул ирҙәрҙең. Ҡатын-ҡыҙ затының хатта бәләкәс кенә сыҫҡандан да ҡото алынып ҡурҡыуын иҫәпкә алғанда, уларҙы ошондай хәүеф-хәтәрҙән ниндәй булһа ла ир заты ҡурсалай алыуын барыһы ла белә. Яһалмамы, түгелме, йәшәһен ирҙәр көнө!

**Һеҙҙең быуындың армияла хеҙмәт итеүе менән ғорурланыуы беҙҙе шаҡ ҡатыра. Хәҙер егеттәрҙең күбеһе әрме хеҙмәтенән нисек тә булһа "косить" итергә сәбәп эҙләп ыҙалана. Донъялар шулай үҙгәрҙеме, әллә ир-егетлек бөҫкәрҙеме?**

"Заман башҡа, заң башҡа", тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр олатайҙар. Рух азатлығы булмаған мөхиттә лә ир-азаматтар тыуа торған. Хәрби хеҙмәт мәжбүри булһа ла, ул заман һалдаты үҙен ҡол итеп тойманы. Әрме хеҙмәтенә алынмағандарға хатта түбәнһетеберәк ҡарайҙар ине. Совет Армияһы күпме егеттәребеҙҙе ысын батырҙар дәрәжәһенә күтәрҙе! Хәҙер теләнә ни килә - шуны һөйләй, ни теләһәң - шуны эшләй алаһың. Әммә, Лермонтов яҙғанса: "Баһадирҙар - һеҙ түгел", - тип кенә ҡабатларға ҡала. Хәҙерге йәштәр нисек тә булһа хәрби хеҙмәткә бармау өсөн ялған сәбәп эҙләүҙе "косить" һүҙе менән атай: элек ҡылый ҡүҙлеләрҙе армияға алмағандар бит. Иле ниндәй, армияһы ла шундай, тиһәк, яңылышмабыҙ. Ҡыҙғаныска ҡаршы, Рәсәй армияһында ябай һалдаттың кешелек дәрәжәһе һаңға һуғылмаған осраҡтар булып тора. Әгәр армияла ҡырағай тәртип хөкөм һөрә, көслөрәктәр көсһөҙҙө йәберләй башлай икән, был үтә хәүефле. Быңдай армияла батырҙар түгел, бахырҙар күбәйә бара. Тоталитар дәүләттәргә хас булған мәжбүри хәрби хеҙмәт итеү туҡтатылып, профессиональ армия булдырыла ҡалһа, иң тәүәккәл һәм ҡыйыу егеттәребеҙ үҙҙәре үк хәрби хеҙмәткә атлығып торор ине.

**Ир-егеттәр араһында тәмәке тартыу киң таралған. Йәштәштәребеҙҙең байтағы ошо алама ғәҙәткә тиҙ арала күнегә лә китә: был үҙенә күрә бер егетлек сифаты итеп ҡарала. Тәмәке ҡапҡанынан берәй заман ҡотола алырбыҙмы икән?**

Тәмәкеселәрҙең берәүһе генә лә тартҡаны арҡаһында файҙа алған булһа, был донъя кимәлендәге сенсация булыр ине. Был егетлек түгел, торғаны менән ахмаҡлыҡ. Саф һауа һулар урынға үпкәнә үҙен теләп ағыулы төтөн тултырыуҙы башҡаса нисек нарыҡлайһың инде?! Әлбиттә, тәмәке тартҡан әҙәм тиҙ арала ғына үлмәй, әммә ул барыбер Хоҙайҙан бирелгән ғүмеренең байтаҡ өлөшөн елгә, йәғни төтөнгә осора. Табиптар тик Рәсәйҙә генә 230 меңдән ашыу кешенең тәмәке тартыу арҡаһында ваҡытынан алда үлеүен билдәләй.

Ата-бабаларыбыҙ күп быуаттар буйына тәмәкенең ни икәнен дә белмәгән, белгәс тә унан баш тартҡан. Урыҫтар араһында тәмәке XVII быуатта тарала башлаһа ла, тәүҙә тыйылған була. Европаса йәшәүҙе үҙ күргән Петр батша, Рәсәйҙә тәмәке тартыуҙы хуплап, уны таратыу аша дәүләт ҡаҙнаһына инәсәк килем тураһында ҡайғыртҡан. Игтибар итегеҙ: тәмәке бынан өс йөҙ йыл элек тә, хәҙер ҙә уны һатып байыусы барондар мәнфәғәтенә хеҙмәт итә. Әммә Петр батша армияһы составында Азов походында ҡатнашҡан Алдар батыр һәм уның яугирҙары ла, 100 йылдан һуң Парижды алған башҡорт ирҙәре лә был "шайтан" үләне төтөнөн һурыуҙан баш тартҡан. Тәмәке тартып ағыуланғансы, ҡурай тартып, моң сәсеүҙе хуп күргән аҡыллы башҡорт ирҙәре. Бынан 100 йыл элек башҡорттар араһында тәмәке тартыусылар бармаҡ менән генә һанарлыҡ булған да һуң, әммә урыҫ цивилизацияһы барыбер үҙенекен иткән: тәүҙә урыҫ араһында зимагор булып йөрөгәндәр, армияға һалдатлыҡҡа алынғандар тарта башлаһа, һуңынан был ғәҙәт зыяллылар араһында ла таралып китә. Ирҙәрҙең тартыуы бер бәлә булһа, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың тәмәкегә әйләшеүен тотош милләт ҡазаһы, тип атарға була. Был ҡазанан ҡотолоуҙың ике генә юлы барҙыр: беренсеһе - донъяның тәмәке индустрияһы юҡҡа сығарылып, иң кәмендә кешелектең 40 йыл тирәһе тәмәкеһеҙ йәшәй алыуы. Икенсеһе - һәр кешенең аңлы рәүештә, үҙ аҡылына таянып, тәмәкенән ваз кисә алыуы. Ҡыҙғаныс, әммә әлегә, айырым кешеләрҙең дә, тотош йәмғиәт аҡылының етлекмәгән булыуы сәбәпле, былар тик хыял ғына булып ҡаласаҡ.

**Һинеңсә, атай, эскелек тә шул аҡылһыҙлыҡ бәләһе булып сыға түгелме һуң?**

- Шулай, тип әйтһәң дә була. Әммә бында эш беҙ уйлағандан да ҡатмарлыраҡ, улым. Эскелектең тарихи тамырҙары бик тәрәнгә, боронғо замандарға уҡ барып етә. Составында аҙ миҡдарҙа булһа ла спирт булыусы эсемлектәр тураһында кешелек күп мең йылдар уҡ белгән, тора-бара уны бик оҫта итеп әҙерләргә лә өйрәнгән. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ҙа буҙа, ҡымыҙ, әсе бал серҙәрен белгән, хатта һөт араҡыһын да яһай алған. Әммә беҙҙе, ҡеүәтле спиртлы эсемлектәрҙе һыу урынына һемерергә күнеккән хәҙерге заман кешеләрен, айыҡ аҡылын һис юймаған ата-бабаларыбыҙ менән сағыштырып булмайҙыр. Буҙа менән ҡымыҙҙың да, еңелсә генә әсетелгән ҡорт балы эсемлегенең дә кешегә файҙалы икәнен кем белмәй һуң? Әммә ата-бабаларыбыҙ сама белгән, аҡылын юйғансы эсеүҙе хурлыҡҡа һанаған, ваҡытында урыҫ араҡыһының тамсыһын да ауыҙына алмаған. Тәүҙә ир-аттарыбыҙҙың, ә һуңынаныраҡ ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың да мейеһен томалаусы эскелек урыҫ мөхитенә яраҡлашыуыбыҙҙың, уның көнкүрешендәге иң яман ғәҙәттәрен үҙләштереүебеҙҙең фажиғәле һөҙөмтәһе ул. Башҡорт араһында 100 йыл элегерәк кенә алкоголиктар булмаған бит! Әйткәндәй, спирт ҡушылып боҙолмаған йөҙөм виноһын ғына ҡулланған Кавказ халыҡтары, молдовандар араһында ла эскелекҡә урын булмаған заманында. Тимәк, беҙгә лә ата-бабаларыбыҙ йолаларына кире ҡайтыу зарурлығы бар. Быны үтәүҙе иң элгәре ир-аттарыбыҙ үҙ өҫтөнә алһын ине, тип теләйек.

**Атай, ир-егеттең ҡатын-ҡыҙға битараф булмауы билдәле. Ирҙәр араһында, хәләл ҡатыны була тороп та, башҡа ҡатын-ҡыҙ менән сыуалғандар бихисап. Быны ғәҙәти хәл тип ҡабул итергә кәрәкмәйме икән, ғаиләләр ҙә тарҡалмаҫ ине, бәлки?**

- Ниндәй генә заманда йәшәмәһен, ирҙәр ирлеген итә инде ул. Тәбиғәтенә һалынғандан бер кем дә ваз кисә алмай. Әммә әҙәп, әхлаҡ тураһында онотоу бер кемде лә яҡшыға алып бармай. Мосолмандар араһында киң таралған күп ҡатынлылыҡ был мәсьәләне үҙенсә хәл итә алған, тип әйтергә кәрәк. Шул уҡ ваҡытта ғүмер буйына тик берберенең генә яратышып йәшәгәндәр аҙмы ни? Был мәсьәләне һәр кем үҙ намыҫы ҡушҡанса, иң әүәл ғаилә бөтөнлөгөн, бала-сағаһының киләсәген уйлап хәл итергә тейеш. Шунлыҡтан, ир-егеттең был сифатын ғәҙәттән тыш итеп тә, йә булмаһа, ҡәҙимге һәм күнегелгән хәл рәүешендә баһалау дөрөҫ булмаҫ ине.

**Ирҙәр холҡо, тигән төшөнсәне нисек аңлатып була?**

- Минеңсә, ирмен тигән ир-егет йәшәйештә һис туҡтауһыҙ осрап торған ауырлыҡтарҙан, ҡатмарлы хәлдәрҙән баҙап ҡалырға тейеш түгел. Үҙендә генә түгел, башҡаларҙы ла яҡлай алырлыҡ көскә эйә булырға кәрәктер. Һүҙ физик көс-ҡеүәттән бигерәк рух ныҡлығы тураһында бара. Ир-егет өсөн иң аламаһы - дыуамаллығыңды еңә алмау, ҡаты бәғерле булыу. Кемдер былаҙы ла егетлек һанайҙыр, әммә быңдай сифаттарҙың булыуынан булмағаны мең артыҡ. Йөҙөң асыҡ, күңелең киң, ҡарашың яғымлы икән - һине ир-ат та дуҫ тиер, ҡатын-ҡыҙ ҙа ихтирам итер. Ваҡсыл һәм мыжыҡ булһаң, бер кем дә өнәмәҫ. Эшеңдә лә, йәмғиәт тормошонда ла, үҙ ғаиләңдә лә башҡаларҙы үҙ артыңдан эйәртә алһаң, холҡоңдоң ирҙәрсә булыуын аңларһың.

**Вәли ИҘРИСОВ**
**яуап бирҙе.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ЙОМОШ, ХӘЙЕР, ҮТЕС...

**Йәй көнө ауылда булғанда ҡыҙыҡ бер асыш яһаным. Хәҙерге балаларҙы йомошҡа ебәреп булмай икән. Улар хатта был "йомош" тигән һүҙҙе лә аңламайҙар. Туғанымдың балаһына: "Бар, ҡыҙым, күрше инәйгә йомошҡа инеп сыҡ әле"- тиһәм, "Нимә була ул?" тип аптырай. "Унда электән боронғо касар бысағы була торғайны, шуны һорайҙар тиген", - тиһәм, "Ю-уҡ! Улайтып нәмә һорай алмайым", - тип ҡырҡа баш тартты. Әсәһе лә: "Хәҙер кеше кешенән нәмә алмай бит ул", - тип яҡлашты. Мин әле ҡалала ғына шулай микән тиһәм, бөгөн ауылда ла әҙәмдәр бер-береһенә йомошҡа инмәй, бирәсәккә алмай, булғанын бүлешмәй, сәбәпһеҙ саҡырышмай, мунсаға әйтмәй икән.**



"Элек юҡлыҡ ваҡытында ғына шулай булған", - тиерһегеҙ, бәлки, шулайҙыр ҙа, әммә шул "йомош" тигән һүҙ менән берлектә алсаҡлыҡ, йомартлыҡ, киң күңеллелек, асыҡлыҡ кеүек ихласлыҡ хис-төшөнсәләре лә юғала бара бит. Ябай ғына миҫал: бөгөн командировкаларҙа йөрөгәндә сәйгә йәки йоҡлап сығырға саҡырған кеше һирәк. Бынан ун биш-егерме йыл элек журналисты йә артисты фатирға төшөрөргә теләүселәр тартҡылашып китә торғайны. Хатта бер нисә кешегә сәйгә инергә тура килә ине.

Беҙ бәләкәйҙән йомошто, үтесте, хәйерҙе барыбыҙ ҙа белдек. Йомошҡа, хәйер алып барырға ебәргәндәрен ярата ла торғайныҡ. Ғаиләлә лә бер йомошсо бала була. Һәм был баланы әсәй бушҡа ғына ла һайламай, уның теле лә, үҙен тотошо ла, башҡа фиғелдәре лә, нисектер, алсағыраҡ, үткенерәк булалыр инде. Беҙҙең өйҙә мин йомошсо булдым. Бәләкәй генә көйө ололарҙың донъяуи мәсьәләләрен дә хәл итә инек әле. Мәҫәлән, әсәй булмағанда күрше еңгәйҙән икмәкте баҫып бирергә йәки мейескә ултыртышырға, иртәнге һауынды башҡарып торорға килешәһең. Хатта имсәк туғаныңды күтәреп алып барып, берәй һөтлө апай менән һөйләшеп, имеҙҙереп тә алаһың. Икмәк, тоҙ, шәкәр, әсетке һорап тороу тураһында һүҙ ҙә юҡ инде. Был ризыҡтарҙы ололар булмағанда һораһалар ҙа бүлеп бирергә икәнде беләһең. Үҙегеҙгә берәй бала йомошҡа килеп инһә, шатланып ҡаршы алаһың. Бөгөн берәй бала килеп инһә, иғтибар ҙа итмәйһең бит, сөнки улар уйнарға ғына килә. Элек бала йомошон бөтөн тәртиптәре менән башҡара белә ине. Инеп һаулыҡ һораша ла, ишек төбөндә туҡтап, өндәшмәй ҡала, уға "үт тә үт" тиҙәр, тик ул үҙенең уйнап түгел, ә етди эш менән йөрөүен белдереп, баҫып тора бирә. Унан "Ни йомош?" тип һорайҙар. Шунда инде ул йомошон ярып һала. Ә инде йомош үтә лә сетерекле булһа, ололар тарафынан яҙылған хатын һуҙа. Йомош үтәүсене күп осраҡта маҡтап, һөйөп, кеҫәһенә тәм-том, һис юғы, икмәккә май-шәкәр һылап тоттороп булһа ла сығаралар. Баланың күңеле үҫеп, кәйефе күтәрелеп китә, әлбиттә. Шуға ла йомошҡа йөрөүҙе ярата ла инек. Халыҡ бер-береһен "йомошҡа һәйбәт", "үтескә ыңғай" йәки "йомошҡа ҡаты", "хәйерһеҙ" тигәнерәк билдәләр менән дә бүлеп бөтә. Был баһалама уның ниндәй булыуын тулыһынса асып та бирә ине.

Икенсе яҡтан, йомош йомошлатыу йолаһы баланы иртә үҙаллы, ҡыйыу булырға өйрәтте. Кеше менән һөйләшә белеү, ниндәйҙер нескә психологик алымдарҙы аңлау һәм ҡулланыу, кем менән нисек аралашырға икәнде төшөнөү ҙә маҡсат ителә баланы йомошҡа ебәргәндә. Компромислы булыу, диалог ҡора белеү, үтенес белдереү, матур мөғәмәлә, иплелек кеүек сифаттар ҙа тәрбиәләнә бер ыңғайҙан. Ә инде иң ҙур тәрбиәүи өлөшө - ул ниндәйҙер проблеманы йә башҡа кешеләр менән аралашып, һөйләшеп-килешеп хәл итә белеүгә өйрәтеү тип һанайым мин. Бөгөн беҙҙең балалар бер нәмәне лә кеше менән мөнәсәбәткә инеп хәл итә һалмай, барыһы ла һатып ҡына алына, тип уйлай. Миҫалға бер хәл: танышым ғаиләле улына прописка эҙләй. "Ир кеше ни өсөн һине йөрөтә, үҙенә ни булған?" тиһәм, "Ул улайтып һоранып өйрәнмәгән шул", ти. Тимәк, ир ҡорона ингән әҙәм үҙенә кәрәк нәмә өсөн икенселәр менән диалог ҡора, килешә, үтенес белдерә алмай. Уны быға өйрәтмәгәндәр. Ысынлап та, беҙ балаларҙы "кешенән һоранып йөрөмә" тип тырыштырабыҙ бит, барыһын да алдарына алып килеп һалабыҙ, уны кәмһенеп, ғорурлығын ҡуҙғытып, йөҙөн ҡыҙартып ҡуйыуҙан мөмкин тиклем аралайбыҙ. Улар өсөн барыһын үҙебеҙ һорап, килешеп, табып, алдарына алып килеп һалабыҙ.

Ысынлап, хәҙер кешелә бөтөн нәмә лә бар. Күршегә йомош менән инерлек мохтажлыҡ та ҡалмаған. Йомошлашыр мохтажлыҡ булмағас, һынашыу, бер-береңде кисерә, аңлай белеү, хәленә кереү тигәндәре лә юҡҡа сыға. Бала саҡта һыйыр һыуалғанда күрше еңгәй үҙ белдеге менән һауын һайын һөт бирә, уларҙыҡы һауҙырмағанда әсәйем беҙҙән аша ебәртә ине. "Әсетке" һылтауы менән килгән инәйҙәр хәл белешеп, һөйләшеп ултырып китәләр. Хәйер биреп сыҡҡандар изге теләктәр алып китә. Ҡәйнәм, "ураған һайын йомошом төшөп тора" ти ҙә, күршеһендәге яңғыҙаҡ иргә ашын да, йылы икмәген дә, табын тәм-томон да индерә, башҡаһын да бирә һәм ир ҡулы кәрәктә үҙен ярҙамға ла саҡыра ине. Һәм йылы һүҙен, рәхмәтен йәлләмәй, маҡтап-хуплап сығара. Ә бөгөн ҡайһы бер ауылдарҙа ҡәбер ҡаҙырға ла кеше тапмайҙар, уның өсөн йә аҡса, йә эсергә һорайҙар. Кешеләр бер-береһенә бушлай ярҙам, изгелек эшләүҙе, йомош үтәүҙе онотҡан.

Шулай уҡ хәйер биреү һәм хәйер алыуҙың да баһаһы төшөп китте. Хәйер биреү ғәҙәти күренеш ине бит. Өләсәйҙәргә, әсәйҙәргә күрше-тирә, юлға сыҡҡандар, ниндәйҙер ҡыуанысы булғандар хәйер индерә ине. Был аҡса, сәй-шәкәр, тәм-том, сепрәк-сапраҡ ине. Һуғым йә ҡорбанда ит, картуф алғанда картуф та булып ҡуя. Әйткәндәй, ошо ҡорбанда яҡташым Рәшит Зәйнуллин мул ғына итеп ит алып килде. Үҙем бирһәм дә, алғаным булмағас, мин дә юғалып ҡалдым, уңайһыҙландым. Ул киткәс, ҡыҙҙарым: "Ниңә ул беҙгә ит алып килгән? Беҙ ит һатып ала алмайбыҙмыни!" - тип асыуланды. Хатта "Кире алып барып бир, былдай хәйер ярлыларға ғына бирелә бит", тип тә ныҡыштылар. Бына инде, йомош, хәйер, үтес тигән төшөнсәләрҙе белмәгән, аңламаған быуын.

Ошо һөйләгәндәрем хаҡында башҡалар ни ти, хаттар яҙып ебәрегеҙсе әле.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

КИНӘЙӘ



# БОРОЛОРҒА БОЙОРОҠТО...

## баш бит үҙе бирә

**"Ир - баш, ҡатын - муйын", тигән мәҡәл бар. Был мәҡәлдең мәғәнәһен нисек аңлайһығыҙ, ғөмүмән, бөгөнгө ғаиләлә кем - баш, кем - муйын?**

***Зөфәр ЗАРИПОВ, мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Баш, йәки етәксе роленә бөгөн ҡатын-ҡыҙҙар күберәк дәғүә итә. Йәмғиәте ниндәй, ғаиләһе лә шундай - һис аптырарлығы юҡ. Ә инде күңел торошона ҡарап билдәләгәндә, бында тулы азатлыҡ һәм тигеҙлек булырға тейеш. Ни өсөн тигәндә, күңел кимәлендә ғаилә төшөнсәһе беренсе урында түгел. Ошо турала бер кинәйәле хикәйә быға асыҡ миҫал. Бер-береһен үлеп яратҡан егет менән ҡыҙ күлдең ҡапма-ҡаршы яғындағы һарайҙа йәшәгән. Улар көн һайын күл ситендәге билдәле бер урында осрашҡан. Көндәрҙән бер көндө егет ҡыҙға өйләнеү тураһында тәҡдим яһаған. "Мин һиңә кейәүгә сығырға ризамын, - тигән принцесса. - Тик өйләнешкәндән һуң да һәр беребеҙ үҙ һарайында йәшәһен". Егет, әлбиттә, быға риза булмаған, ул тиҙерәк һөйгәнен үҙ һарайына алып ҡайтырға теләгән. "Улайһа, һин мине яратмайһың, әгәр ҙә яратһаң, минең азатлығыма дәғүә итмәҫ инең",- тигән ҡыҙ. Тимәк, ғаилә - ул бәләкәй генә яңы йәмғиәт төҙөү өсөн үҙ-үҙеңде, иң тәү нәүбәттә, азатлығыңды ҡорбан итеү. Ана шул ике ҡорбандың береһе - баш, икенсеһе - муйын. Ә ҡорбан өсөн баш булдың ни ҙә, муйын булдың ни - барыбер түгелме? Ҡолдар йөк тартып өйрәнгән инде ул. Бары ғаилә йөгөн дә бер йүнәлештә тартһындар, шуныһы мөһимдер, минеңсә.

***Әхмәт ЗАКИРОВ, мәғариф хеҙмәткәре:*** Ғаиләлә һәр саҡ ир - баш, ҡатын муйын була. Шуға ир төрлө юлдар менән аҡса таба, йәшәргә урын йүнләй, ҡатын ғаиләне эстән һаҡлай - балаларын, өйөн ҡарай. Әммә бөгөн илдең иҡтисади хәле насарайыу сәбәпле, ирҙәр йүнләп аҡса ла эшләй, йәшәргә урын да таба алмай. Ҡайҙан тапһын - 80-се йылдарҙан бирле йәштәр һатып алырлыҡ фатирҙар ҙа, ятаҡтар ҙа төҙөлмәй. Шул сәбәпле ирҙәр бөгөн баш була алмай. Уларҙың нервылар системаһы оҙайлы көсөргәнешкә, йылдар буйы аҡсаһыҙ, фатирһыҙ йәшәүгә түҙә алмай һына, һәм улар эсә башлай. Ә ҡатын-ҡыҙ түҙемле. Шулай булмаһа, ул туғыҙ ай буйы ауырлы йөрөй алыр инеме? Ҡартәсәйем һөйләй торғайны: һуғыш ваҡытында ул бар булған ризыҡты малайҙарға биргән, шулай итеп, уларҙы һаҡлап алып ҡалған. Ҡыҙҙарына һыу ғына эсергән, ә улар барыбер бирешмәгән.

Шулай итеп, илдең хәле ирҙәрҙе юҡҡа сығара, баш булырға, ғаиләһен яҡларға, һаҡларға мөмкинлек бирмәй.

***Хөрмәт ИБРАҺИМОВ, инженер-төҙөүсе:*** Бер шағир әйтмешләй:

*"Ир - баш, ҡатын - муйын.*
*Мәҡәл дөрөҫ булһа ла,*
*Боролорға бойороҡто*
*Муйын бит баштан ала".*

Йәғни, икенсе төрлө әйткәндә, кешегә өндәшһәң, мәғлүмәтте бит муйын түгел, башта торған ҡолаҡ ҡабул итә һәм мейегә тапшыра. Шунан мейе баш аша муйынға бойороҡ бирә. Тимәк, баш булмайынса, муйын үҙенән-үҙе борола алмай. "Ир - баш, ҡатын - муйын", тигән мәҡәл көнкүреш кимәлендә генә, төптән уйламайынса әйтелгән. "Ирҙең дәрәжәһен һаҡлап, уны күтәреп йөрөтөүсе муйын", тип, уны икенсе төрлө лә аңлатып була түгелме? Тимәк, ҡатын-ҡыҙ иренең йәмғиәттә лә, ғаиләлә лә аҡыл яғынан да, физик күрһәткестәре буйынса ла лайыҡлы ир-зат икәнен белдереүсе, ҡурсалап, күтәреп йөрөтөүсе "муйын" булырға тейеш. Ул башты алып йөрөүсе генә түгел, ә, ниндәйҙер кимәлдә, үҙенең ҡатын-ҡыҙ вазифаһы менән ирҙең баш булыуын тәьмин итергә, һис юғы, булышлыҡ итергә бурыслы. Ғәжәп кеүек тойолһа ла, беҙ һәр секунд һайын ҡатын-ҡыҙ затын иҫебеҙгә төшөрөргә мәжбүрбеҙ. Мәҫәлән, һәр беребеҙҙең әсәһе ғүмер буйы башынан сыҡмай. Әсәлек ҡиммәте лә ошо муйын төшөнсәһенә һалынған, ул бит "башты" донъяға килтергән һәм ирҙе күтәреп йөрөтөүсе һымаҡ күҙаллана. Хәләл ефеткә килгәндә, үҙебеҙҙе тулы ҡанлы тойоп, үҙебеҙҙе һынау өсөн дә ҡатын-ҡыҙ кәрәк. Был йәһәттән ҡатын-ҡыҙ иренә баһа биреүсе шкаланың теленә оҡшаш. Ул иренең ғәйрәтлеген, аҡыл һәләтен күрһәтә. Тимәк, ир - баш, ҡатын - муйын, тигән мәҡәл дөрөҫ, әммә ләкин бөгөнгө ысынбарлыҡта уға тарайтылған мәғәнә һалалар. Йәнәһе, муйын ҡайҙа теләй, шунда бора. Улай түгел: боролорға бойороҡто муйын бит баштан ала...

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ яҙып алды.**

*ӘЙТӘГҮР!*



## МИЛЛӘТ ӘСӘҺЕ БУЛ!

**ҺОРАУ: "Ҡатнаш никахтар беҙҙең милләттең бер бәләһе икәнен таныйһығыҙмы?"**

***Зөһөрә ХУЗИНА, Дәүләкән районы:*** Нимә генә тимә, ҡатнаш никах ҡорғанда, барыбер ҙә милләтте айырыу килеп сыға ул, ә бүрәнәнең ауыр яғы балаға төшә. Татар әсәйҙән һәм башҡорт атайҙан тыуған бала булараҡ, мин уны үҙ иңемдә татып, бәләкәйҙән уларҙың бер-береһенә ҡарата кәмһетеү һүҙҙәрен ишетеп үҫтем. Ғауға ҡупһа, әсәйем атайымды "Ах, һин, ялҡау башҡорт" тип әрләр ине. Ә балалар мине: "Татар, татар тарама, килмә беҙҙең араға", тип эләкләй торғайны. Шуға ла башҡорт ҡыҙы башҡорт егетенә сыҡһын, тип теләйем. Хәҙерге заманда шул тиклем аҡыллы, егәрле, эшлекле башҡорт егеттәре күп. Ирем менән дүрт ҡыҙ үҫтерҙек. Өлкәне башҡорт егетенә сыҡты. Тимерхан тигән ул үҫтерәләр. Ҡалғандарына ла үҙебеҙҙең милләткә кейәүгә сығаһығыҙ, тип әйтеп торам.

***Сәлиә ҠОРМАНОВА, Әбйәлил районы:*** Ысынлап та, беҙҙең милләттең бәкәленә һуҡҡан проблема был. Ҡайһы милләт менән генә ғаилә ҡорғанда ла беҙҙең башҡорт юғалтыу кисерә. Бындай ғаиләләрҙә теле лә, мәҙәниәте лә, милли рухы ла булмаған балалар үҫә. Ул электән үк милләтте бөтөрөүгә йүнәлтелгән сәйәсәт булғандыр ул. Минең әсәйем дә беҙгә башҡортҡа кейәүгә сығырға кәрәк, тип әйтә торҙо. Балаларым да башҡорт ғаиләһе ҡорҙо. Уларға күркәм исемдәр ҡуштыҡ - Сәлимә, Ислам, Урал. Ейәндәремдең исемдәре шул тиклем матур - Хәйҙәр, Ғайса, Фәрит. Балаға исем биреү ҙә ҙур әһәмиәткә эйә. Мин берәйһенең балаһы тыуһа, иң тәүҙә исеме кем, тип һорайым һәм шул ҡушҡан исеме буйынса уларҙың мәҙәни кимәлен билдәләйем.

***Зарина ЙОСОПОВА, Өфө ҡалаһы:*** Ҡатнаш никахтың ни тиклем ҙур проблема тыуҙырасағын мин үҙем аша кисереп аңланым. Оҙаҡ йылдар сит милләттән булған егет менән бер-беребеҙҙе яратышып, осрашып йөрөнөк. Эш өйләнешеүгә барып еткәс, мин үҙемдән бигерәк, милләтем алдында ни тиклем яуаплы аҙым яһауымды аңланым. Әгәр ҙә мөхәббәт, тип, сит милләткә кейәүгә сыҡһам, ғүмер буйы үҙемде һатлыҡ йән итеп тойоп, мәңге ғазап сигеп йәшәрмен, тип уйланым. Шул мәл яратҡан кешем менән булыуға ҡарағанда, үҙ телемдә аралашыу, балаларымдың миңә "әсәй" тип әйткәндәрен ишетеү теләге көслөрәк булып сыҡты. Шулай итеп, йөрәгемдә үҙ ваҡытында уянған милләт, ер тойғоһо мине оло бәләнән ҡурсып ҡалды. Хәҙер күңелем тыныс, донъям бөтөн. Янымда яратҡан ирем, "әсәй", тип йүгереп йөрөгән балаларым бар. Йәш ҡыҙ-егеттәргә кәңәшем шул: мөхәббәт тип, сит милләткә алданмағыҙ, үҙ милләтең менән йәшәгәндә генә ысын ратыу тойғолары уяна, быны мин үҙем кисергән кеше булараҡ әйтәм.

*ҠЫҘ-ҠАТЫН ҠОЛАҒЫНА*

# НИ ӨСӨН МАТУР БУЛЫРҒА?

**Һеңле тейеш кешем менән интернет аша йыш бәйләнешкә инәм, хәл белешеп, яңылыҡтар бүлешеп һәм төрлө фотолар менән алмашып торабыҙ. Йәғни, "аралашып" йәшәйбеҙ инде. Тормошҡа иртә сыҡҡас, балалары ла иртә үҫеп бөттө һәм шул ҡатын 42 йәшендә ике ейәнгә өләсәй булды. "Йәш өләсәй" тип әйтер инем, уға был һүҙ тура килмәй, "йәш әбей" тиеү (әбейҙәр үпкәләп ҡуймаһын) дөрөҫөрәк булыр. Хатта әбейҙәр ҙә үҙ стилендә үтә лә ҡупшы, ҡараулы була ала. Ә бына урта йәштәрҙәге ҡайһы бер ҡатындарҙы ниндәй зат тип атау ҙа урынһыҙ һымаҡ.**



Беренсенән, туғаным йәмһеҙ булып һимергән. Юҡ, ауырымай, ашауҙы самалай алмауы арҡаһында ғына киңлеккә йәйелгән ул. Икенсенән, сәсен ҡып-ҡыҫҡа итеп ҡырҡтыра ла ҡуя. Уға был барыбер, елкәһенә, күҙенә төшөп тормаһа, булды. Өсөнсөнән, өҫтөндә һәр ваҡыт алама халат йәки үзбәк баҙарынан алынған футболка-ыштан. Ул костюмдың йоҡо кейеме икәнендә эше юҡ, йыуан балтырҙарын, эсен бүҫелдереп кейеп тик йөрөй. Дүртенсенән... бишенсенән... Ҡыҫҡаһы, ул үҙенең ҡатын-ҡыҙ икәнен онотҡан. Ул көҙгөгә ҡарамай ҙа. Ул бит-ҡул йыуыу һәм мунса төшөүҙән башҡа матурланыу ысулдарын онотҡан. Ул осһоҙло шәкәр йәки дөгө ҡайҙа һатылғанын белә, әммә бит кремы ҡайҙан алырға икәнен белмәй. Интернеттан үҙенә һис кәрәге булмаған кешеләрҙең ғәйбәтен көндәр буйына уҡып ултыра ала, ә берәй ҡатын-ҡыҙ сайтына юлыға алмай. Ул сумка-сумка итеп аҙыҡ түлек ала ла, шуларҙы кәштәләренә теҙеп һала. Алғандарының әле ике ай элек булғандары ла асылмағанында эше юҡ, иттәре һыуыҡтысты тултырып, ярмалары шкаф тулып ятырға тейеш. Ә кейемгә аҡса йәлләй! Байрамға кейә торған бер күлдәге бар ине, уныһы ла хәҙер һыймай, шуға алмашҡа күлдәк һайлап, икәү-ара бәхәсләшеп бөттөк. Кейемде тик хаҡтары төшкән ерҙән генә эҙләй. Нимәлер аңлатыу һәм өйрәтеү урынһыҙ, сөнки кеше бындайҙы үҙ башында етлектереп кенә аңлай ала, күрәһең. Эшкә кейгәндәре лә иң осһоҙло һәм сифатһыҙ әйберҙәр. Ә бит ул аҡсаһыҙ әҙәм түгел. Һөнәре бар, ире лә, улы ла аҡса килтереп тора. Аҡсалары "ҡара көндәрҙе" көтөп, ҡайҙалыр йәшеренеп ята. Аҡ көндәренең иң ҙур ләззәте ашау-эсеүгә генә ҡайтып ҡала булып сыға. Аңлатырға теләһәң, уның яуабы бер: "Миңә нимәгә ул? Мин бит инде өләсәй! Миңә бара... "

Ни өсөн ҡатын кеше матур булырға, матурланырға һәм матурлыҡҡа ынтылырға тейеш? Тейеш! Сөнки тәбиғәт шулай итеп яралтҡан: сәскәләр нәфислеге менән һоҡландыра, хуш еҫен бөркә, ҡояш йылыта, ҡоштар һайрай, һыу һыуһынды ҡандыра, ҡатын-ҡыҙ илһамландыра. Йәш ҡыҙҙар ҙа, урта йәштәге ҡатындар ҙа, оло апайҙар ҙа, инәйҙәр ҙә ир енеслене, эргә-тирәләгеләрен илһамландыра, уларҙа реакция уята алһын. Урамда осраған егетме, иреме, ҡустыһымы, улымы, ейәнеме - янындағы ҡатын-ҡыҙға яратып баҡһын. Ә уны буш урын, аңлайышһыҙ формалағы йән эйәһе итеп ҡабул итмәһен. Бында бит йөҙ-төҫ гүзәллеге тураһында ғына бармай һүҙ, ә үҙеңде ҡарау һәм матур итеп тоя белеү үҙенсәлеге тураһында бара.

Әхирәтемдең йәш ҡыҙын нисә йылдар инде тик джинсыла ғына күреп өйрәнгәнмен дә, бер мәл уйламағанда күлдәктә күреп шаҡ ҡаттым. БыҒаса мин уны хатта аңғармай ҙа торғайным, бармы бала - бар, ә был юлы эргәмдән үткән һайын һөйөп, һоҡланыуымды белдереп торғо килде. Ҡатын-ҡыҙҙы ҡатын ҡыҙ кейеме генә шулай күркәмләндерә ала инде ул. Йәлпелдәк итәкле күлдәктәргә ни етә? Бына ошо ҡиммәттәрҙе ҡыҙҙарға бәләкәйҙән өйрәтергә, һалырға кәрәк икән ул. Ҡиммәтле булмаһа ла, бөхтә кейенергә, сәсте мөмкин булған тиклем ҡыҫҡартмаҫҡа, кәүҙәне формала тоторға һәм иң мөһиме үҙеңде яратырға! "Матур ҡатын йәшәй! Ә матур булмаған тереклек итә", тип яҙып ҡалдырған бер билдәле шәхес. Һәм ул дөрөҫтө әйткән.

Ҡатын-ҡыҙға матурланыу һәм биҙәнеү бер илдә лә, бер ниндәй ҡанундар аҫтында ла тыйылмаған. Матурлыҡ салондарҙа һәм ҡиммәтле косметикала ғына түгел. Матурлыҡ модалы кейемдә һәм брендлы әйберҙәрҙә түгел. Мин, мәҫәлән, өйҙә матур булыуҙы ҡәйнәм миҫалында күрҙем. Ябай ауыл ҡатыны, пенсияла, мал, ҡош-ҡорт араһында ғына бутала. Шунда ла өҫтөндә һәр ваҡыт ябай тегелешле сәскәле күлдәк, шул төҫтәге биҙәкле яулыҡ, бөхтә, ҡараулы, таҙа. Баҡсала картуф күмеп йөрөһә лә, сәй артына сынъяһау булып килеп ултыра, магазинға сыҡһа, кеше араһына барһа, нәскиенә тиклем алыштырып кейеп сыға. Бөтә нәмәлә лә самалы, шул иҫәптән аҙыҡты ла мәлендә һәм сикләп кенә ҡуллана. Һәм балалар уға йыш ҡына: "Өләсәй, һин ҡалай матур! Һинең алҡаң матур, яулығың, күлдәгең..." тип һоҡланып урап ҡарап сыға.

Матурлыҡҡа өйрәнеү бер йәштә лә һуң түгел. Был тәңгәлдә ҡул эше ярҙам итә, тип яҙа белгестәр. Төҫлө ептәр, бисерҙар менән эш итеү, тегенеү фантазияны, ҡатын-ҡыҙ асылына ынтылышты уята икән. Ижади эшләү, китаптар уҡыу, концертҡа йөрөү ҙә рухи үҫеш ул.Үҙеңде матурлап, һылап-һыйпап, тәрбиәләп, һин бит тик үҙеңде генә ҡайғыртмайһың, шул уҡ эргәләгеләреңдең, яҡындарыңдың тормошон да яҡтыраҡ итәһең. Мәҫәлән, үрҙә телгә алған геройым бер көн килеп күлдәк кейһә, аҙыраҡ ауырлығын ташлаһа һәм сәсен үҫтерә төшһә, унан да сибәр ҡатын булмаҫ ине. Ә бит йәш сағында ер һылыуы ине шул ханым. "Матур булыу ҡатын-ҡыҙҙың бурысы, - тигән юлдар бар аҡыллы яҙмаларҙа. - Әгәр ҡатын матур булыу өсөн аҡса, ваҡыт һәм көс бүлмәй икән, ул үҙ бурысын үтәмәй һәм йыһан да уға тейешле өлөшөн бүлмәй".

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

*РИЗАИТДИН НӘСИХӘТТӘРЕ*

## ҠЫҘ-ҠАТЫНДАРҒА



♦ Ирегеҙҙең хосусан йорт эсендәге хеҙмәттәрен рәхәтләнеп эшләгеҙ. Әмерҙәренә итәғәтле булығыҙ. Тыйған әйберҙәренән йыраҡ тороғоҙ, һытыҡ йөҙ менән ҡарышмағыҙ. Өндәшмәй үпкәләп йөрөмәгеҙ. Юҡ-бар нәмә өсөн мығырҙамағыҙ һәм ыңғырашмағыҙ. Ҡаршы һүҙ ҡайтармағыҙ. Ир хәтерен ҡалдырырлыҡ эш эшләмәгеҙ. Уның рөхсәтенән тыш, өйҙән сыҡмағыҙ.

♦ Оялсан, әҙәпле, намыҫлы булығыҙ. Иргә гүзәл мөнәсәбәттә булығыҙ. Хөрмәтенә кәмселек килтермәгеҙ. Вәғәҙәләрен юҡҡа сығармағыҙ. Серҙәрен фашламағыҙ. Малдарын исраф итмәгеҙ. Уларҙың рөхсәтенән тыш һис кемде янығыҙға саҡырмағыҙ. Кейем-фәлән өсөн артыҡ нәмә теләмәгеҙ.

♦ Ирегеҙҙең ата-әсәһенә итәғәтле булығыҙ. Башҡа яҡындарын ҡарындаш иҫәпләгеҙ. Балалары булһа, ирегеҙ хәтере өсөн яҡын күрегеҙ.

♦ Замана мәшәҡәттәренә ҡаршы торған ирегеҙгә ярҙам итегеҙ. Шатлыҡлы йәки хәсрәтле көндәрендә уның менән бергә булығыҙ. Был донъяның әсесөсөһөн уның менән уртаҡлашығыҙ. Уға һис бер ваҡыт ялған һөйләмәгеҙ. Күрше ҡатындарҙың: "Иремә ялған һөйләнем, белмәне", - тип әйтеүҙәренә алданмағыҙ. Белегеҙ, ҡатындың ялған бер һүҙе булһа ла, иренә һиҙелһә, ире күҙендә ғүмерлек хөрмәте бөтә.

**(Дауамы бар).**

✓ *Ҡараңғы төн беҙгә ярҙамға килде - дошман көтмәгән. Биш фашист генералын, 78 летчигын, 198 һалдат һәм офицерын, 15 самолетын, 4 складын, 120 автомашинаһын, 30 мотоциклын, ике радиостанцияһын ҡулға төшөрҙөк.*



# УРАЛ БӨРКӨТӨ

## Дошмандарҙы көл иткән

...Ләкин һуғыш уты үҙенекен итә... Генерал ашауын, ялын онотоп, окоптан окопҡа йүгерә. "Салауат тоҡомдары, бирешмәгеҙ!"- тип оран һала. Эйе, хәл иткес көндәр...

Сигнал: 294-се полк Сиволюбовоға ташланды. Дошман ҙур көс менән контрһөжүмгә ҡуҙғалған. Беҙҙең ике эскадрон артҡа сигенергә мәжбүр. Шуны күреп торған генерал, атына йәһәт атланып, алғы һыҙыҡҡа сапты. Атын ҡалдырҙы ла, пистолет тотҡан ҡулын юғары күтәреп: "Урал егеттәре сигенеү белмәй! Салауат тоҡомдары, алға!" - тип йүгерҙе. "Олатай" артынан башҡалар ҙа ҡуҙғалып, Сиволюбово тимер юл станцияһын баҫып алдыҡ.

29 декабрь. 294-се полкка командир булып подполковник Г. Е. Фондеранцев килде. Аҙ һүҙле, ныҡ талапсан, ҙур белемле кадровый офицер. Шайморатов уны үҙе һоратып алған икән, тинеләр.

Паршин тимер юл станцияһын үтеп, Красный Яр утарына һөжүм итәбеҙ. Төн ҡараңғы, һыуыҡ (42-44 градусҡа етте), һөжүм барышында Шайморатов төн буйы сатлама һыуыҡта - үҙенең күҙәтеү пунктында. Ниндәй генә һыуыҡтарҙа ла ул бер ваҡытта ла тун, быйма, ҡолаҡсын бүрек киймәҫ ине. Әле лә аяғында - хром итек, өҫтә - шинель, башта - ҡырма бүрек. Табан аҫтында ҡар ҡоростай шығырҙай... Таң алдынан яңы адъютанты Әсғәт Мөхәррәмов (Дүртөйлө районынан: бик уңған, үҙ эшен һәр саҡ еренә еткереп үтәр ине), генералды ҡыҙғанып, буғай, ҡайҙандыр бер шешә табып килтерҙе, араҡы ап-аҡ булып шығырҙап туңғайны. Шайморатов: "Художник, хеҙмәтте белмәйһең!"- тип (унын кешеләргә иң асыуланып әйткән һүҙе, ни эшләптер, "художник" булыр ине), шешәне ташҡа селпәрәмә килтерҙе лә, арты менән бороолдо.

Ҡараңғы төн был юлы ла беҙгә ярҙамға килде - дошман көтмәгән. Биш фашист генералын, 78 летчигын, 198 һалдат һәм офицерын, 15 самолетын, 4 складын, 120 автомашинаһын, 30 мотоциклын, ҡеүәтле ике радиостанцияһын ҡулға төшөрҙөк. Гарнизондың күпселек өлөшөн (780 һалдатын) ҡырып һалдыҡ. Ошо операция һөҙөмтәһендә фашистарҙың Чернышки - Обливская тимер юл участкаһы буйындағы бөтә оборонаһы ҡаҡшатылды, Обливская станцияһын да ҡулға төшөрөп, Паулюс ғәскәрҙәрен тылынан бөтөнләй мәхрүм итеү, тулыһынса уратып алыу мөмкинлеге тоҫмалланды. Ләкин корпустың башҡа көстәре, атап әйткәндә, 21-се һәм 55-се дивизиялар һаман килеп етә алмау сәбәпле, башҡорт дивизияһы үҙе ҡамауҙа ҡалды: утарҙа түңәрәк оборона ойоштороп һуғышырға тура килде. Дошмандың контрһөжүмдәрен кире ҡағыуҙа капитан С. Х. Хәбировтың 148-се артдивизионы ҙур уңғанлыҡ күрһәтте, шунын арҡаһында ғына тип әйтерлек дивизия дошманға утарҙы бирмәне.

Фашистар контрһөжүмдәрен туҡтатты, фронт буйы ваҡытлыса тынып ҡалды. Улар, моғайын, позицияларына кире сигенеп, яҡынлап килгән Яңы йылды тынысыраҡ ҡаршыларға йыйына. Ошонан файҙаланып, дивизия яраларын яманы, һуғышсыларға саҡ ҡына хәл алыу мөмкинлеге тыуҙы. Красный Ярҙағы беҙҙең ҡулға төшкән фашист складтары төрлө азыҡтарға бай булып сыҡты: састарға һәйбәт Яңы йыл алды (ә Яңы йылдың үҙен беҙгә Обливскаяға һөжүм менән ҡаршыларға тура килде) табыны ойоштороолдо. Офицерҙар ҙа генерал янына мәжлескә йыйылды, бөтмөр Мөхәррәмов бай табын әҙерләгән. Оҫтәлдә ром шешәләре теҙелгән, һәр кем алдында затлы трофей приборға һалынған яртышар тауыҡ. Яңы йыл табынының көн элгәре үткәрелеүенән сығып, алда ашығыс эштәр торғанын аңланыҡ. Генералдың ҡыҫҡаса ғына Яңы йыл тәбриген тыңлағас (шул иҫтә ныҡ ҡалған: "Иптәштәр, бөтәгеҙҙе лә яҡынлашып килгән Яңы- 1943 йыл менән ҡотлайым! Ҙур батырлыҡтар күрһәттегеҙ, алда әле хәл иткес һуғыштар тора, һеҙгә яңынан-яңы уңыштар теләйем. Яуыз дошманды үҙ өңөндә ҡыйратып, һәммәбеҙгә лә иҫән-һау Уралға әйләнеп ҡайтырға, тыныс табын ҡороп ултырырға яҙһын"), тын ҡалып, хужаның табынды башлауын көтөп ултырабыҙ (армияла тәртип шундай). Мөхәррәмовҡа генерал: "Был юлы, өлкән сержант, уҙҙырыбыраҡ ебәргәнһегеҙ, көмөш сәнскеләрегеҙ кәрәк булмаҫ инде", - тип төрттөрөп, уларҙы бер ситкә этәреберәк ҡуйҙы ла тауыҡты ҡулына алды. Йылмайып: "Ҡошҡортто һәр ерҙә лә бына ошолай, башҡортса, ҡул менән тотоп ашайҙар",- тип өҫтәне. Беҙ ҙә ҡапҡыларға керештек. Йәнә шул хәтерҙә ныҡ тороп ҡалған: генерал үҙенең һөйөклө баянында (уны һәр ваҡыт үҙ янында йөрөтөр ине) моңло итеп "Урал", ә унан "Таштуғай" көйөн уйнаны...



1943 йылдың 1 ғинуары. Беҙҙә оло ҡыуаныс: ниһайәт, фашистарҙың Яңы йылды ҡаршылау ғәмһеҙлегенә бирелеүенән файҙаланып, төнгө сапҡын менән Обливская станцияһын алдыҡ, көнбайыш яҡ менән Сталинград араһы тулыһынса бикләнде!

(Дауамы. Башы 37-се һанда).

ҺҮҘ - ҠӘЛӘМДӘШКӘ

# ҺӨНӘРЕМ...

## тормошто яҡшыға үҙгәртеү мөмкинлеге

**Журналистика өлкәһендә эшлекле һәм билдәле гүзәл заттарыбыҙ етәрлек булғанда ла, беҙ был тынғыһыҙ һәм яуаплы хеҙмәтте барыбер ҙә ир-егет һөнәре итеп ҡабул итәбеҙ. Шунлыҡтан, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт наградаһына билдәле тележурналист Рафиҡ Әхмәтшиндың тәҡдим ителеүен ҡуш ҡуллап күтәреп алдыҡ. Был теләктәшлеккә гәзит уҡыусыларыбыҙҙы ла ҡушылырға саҡырып, журналист менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**



**Белеүебеҙсә, һеҙҙең ғаилә журналистар ғаиләһе. Бер һөнәр эйәләре булыу һеҙҙе берләштерәме? Һәм журналистикаға һине ниндәй юлдар алып килде?**

- Журналист булыу бала саҡ хыялым ине. Мәктәп йылдарынан яҙыштым. БДУ-ның башҡорт филологиһы һәм журналистика факультетының журналистика бүлегенә уҡырға инеп, беренсе курстан уҡ радио менән хеҙмәттәшлек иттем. Фәнүзә Баһауетдинова алып барған "Етегән" йәштәр тапшырыуында рубрикам була торғайны. Әйткәндәй, беҙ уны буласаҡ тормош иптәшем Зөһрә Арсаева менән бергәләп әҙерләнек. Университет сиктәрендә Төркиәлә лә белем алырға тура килде. Бурса ҡалаһында урынлашҡан Улудаг университетының социология бүлеген тамамланым. Журналистика менән социологияны йәнәш тора тип иҫәпләйем. Журналист та, социолог та йәмғиәттәге сәйәси һәм ижтимағи үҙгәрештәрҙе тойомлай алыусылар.

Телевидениела 17 йыл эшләйем. Был өлкәне үҙем ентекле үҙләштерҙем генә түгел, тележурналист һөнәре минең холоҡ-фиғелемә лә үтеп инде, миндә үҙенә кәрәкле, тейеш булған яҡтарҙы тәрбиәләне, үҫтерҙе. Һәм, әлбиттә, бында беҙҙең ғаиләнең журналистар ғаиләһе булыуы ла мөһим роль уйнай. Ҡатыным менән икебеҙ ҙә бер тулҡында, донъя, республика кимәлендә барған яңылыҡтар һәм башҡа мәғлүмәттәр икебеҙ өсөн дә ҡыҙыҡлы, бер-беребеҙҙе аңлайбыҙ, борсолоуҙарын, мәшәҡәттәрен белеп-күреп торабыҙ. Үҙ-ара һөйләшер, кәңәшләшер, бәхәсләшер уртаҡ темаларыбыҙ ҙа, бер-беребеҙгә ярҙамлашып ҡына хәл итер ижади процестар ҙа етерлек.

**Тележурналист булараҡ, һеҙҙең сығыштар көн дә-көн дә һәм уларҙың һәр береһе мөһим, әлбиттә. Шулай ҙа һуңғы ваҡыттағы үҙегеҙҙе тетрәткән, күңелегеҙҙә ҡалған тапшырыу хаҡында һөйләп китегеҙ әле?**

- Инйәр урман хужалығы, Мулдаҡай урмансылығының 132-се кварталында рөхсәтһеҙ ҡаҙылған ташты Ҡатау-Ивановск ҡалаһына урман юлы менән оҙатыуҙы төшөрөп алыу өсөн беҙҙең ижади төркөмгә сәғәт ярым ҡыуаҡлыҡта йәшеренеп ятырға тура килде. Ямғыр аҫтында. 30 секундлыҡ кадр өсөн. Һуңынан билгә тиклем һыуға батып, Ләмәҙ йылғаһын кисеп үттек һәм рөхсәтһеҙ таш сығарыу урынына барып еттек. Йәшерен камера ҡулланылды, именлегебеҙҙе уйлап, беҙгә әҙерәк ялғанларға ла тура килде. Урман араһында закон юҡ бит.

Урал хазинаһын тәләфләүҙе туҡтатыу күптән өлгөргән мәсьәлә ине. Таш, мәғрүр тауҙар тиҫтә йылдан ашыу бер ниндәй контролһеҙ аҡтарылды.

Геология разведкаһына лицензия алған ойошмаларҙың, ғәҙәттә, республиканан ситтә теркәлгән булыуы мәғлүм, Улар фуралар менән ҡиммәтле төҙөлөш материалын сеймал килеш республиканан ситкә оҙата торҙо. Шул уҡ ваҡытта урындағы халыҡ эшһеҙлектән йонсоно. Был Башҡортостанды күрәләтә талау ине. Республика Башлығы Радий Хәбиров сәйәси ихтыяр күрһәтеп, был шөғөлдө сикләне. Тыуған төйәгемдең, ер яралғандан алып үҙ урынында торған тауҙарҙың ошондай хәлдә ҡалыуы, карьерҙарҙа сит ил граждандары эшкә йәлеп ителеүен күреп, йәнем әрней торғайны. Шуға ла республика етәксеһенең ҡарары ҡанатландырҙы ғына. Ямғырҙан һуң ташҡан Ләмәҙ йылғаһын кисеп үтергә лә, законһыҙ асылған карьерҙа эшләүселәр менән аралашырға ла көс таптым.

(Дауамы 16-сы биттә).

ИНТЕРНЕТТАН



# КӨҘГӨ КӘЙЕФ КӨНГӘ БӘЙЛЕ

■ Бәшмәкте ризыҡҡа иҫәпләмәһәк тә, ғалимдар өлкән кешеләргә ул файҙалы, тип белдерә. Бәшмәктә эрготионеин тигән берләшмә бар, ул антиоксидант һәм шешеүгә ҡаршы сифаттарға эйә, ти Сингапур милли университеты белгестәре. Һынауҙарҙа 600 өлкән йәштәге ҡытай кешеһе ҡатнашҡан. Аҙнаһына ике тапҡыр бәшмәк ашағандарҙың мейеһе ҡартлыҡ сирҙәренә бирешмәй икән. Ғалимдар шампиньон, шиитаке, шулай уҡ тоҙланған бәшмәктәр ашарға тәҡдим итә. Эрготионеиндан тыш, бәшмәктә нервы туҡымаларына файҙалы берләшмәләр бар.

■ Иллинойс университеты белгестәре асыҡлауынса, бургер, пицца кеүек сәләмәтлек өсөн зыянлы ризыҡтар йөрәк-ҡан тамырҙары системаһында үҙгәрештәргә килтерә. Ҡан тамырҙары һығылмалылығын юғалта. Ғалимдар ике төрлө тикшеренеү үткәргән. Уларҙың икеһе лә был ризыҡтарҙың зыянлы булыуын дәлилләгән. Тәүгеһе мәлендә бер төркөм ҡомаҡтар сәләмәт ризыҡ менән туҡланған, икенсе төркөм фастфуд ашаған. Икенсе төркөмдә ҡан тамырҙары тиҙ арала һығылмалылығын юғалтҡан. Шуныһы ла бар, күҙәнәк мембранаһын кире яҡҡа үҙгәртеү өсөн модалы бургерҙарҙы һирәк кенә ашау ҙа етә. Етмәһә, улар менән ағыуланыу хәүефе лә юғары, сөнки был ризыҡтарҙың ниндәй шарттарҙа яһалыуы тураһында әйтеүе лә ауыр.

■ Көндөң ҡыҫҡарыуы кешеләргә кире йоғонто яһай - депрессия үсешенең бер сәбәбе булып тап ошо фактор тора, тип иҫәпләй неврологтар. Сөнки болотло көндә, төнлектең ҡараңғы мәлендә мелатонин гормоны күберәк бүленә. Шуға ла күҙ көнө үҙегеҙгә күберәк ваҡыт бүлегеҙ. Йәйҙә хәтерләтеүсе еҫтәр ярҙамында кәйефте күтәрергә була. Бигерәк тә лаванда эфир майы тынысландыра. Һөйәкле емештәр майы, кирейһенсә дәрт уята. Шулай уҡ өйҙә майшәм яндырыу ҙа файҙалы икән. Әйткәндәй, б.э. тиклем II быуатта уҡ Рим табиптары ҡояш нурҙарының шифалы йоғонтоһо барлығын белгән. Улар үҙҙәренең пациенттарына ҡояшта күберәк йөрөргә кәңәш иткән һәм был һәр ваҡыт ярҙам иткән.

■ Даими рәүештә тауыҡ йомортҡаһы ашау һәт биҙе яман шеше хәүефен ике тапҡырға кәметә, тип белдерә Америка ғалимдары. 13 йыл дауамында барған тикшеренеүҙәрҙең һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, аҙна дауамында 6 йомортҡа ашау был яман сирҙе иҫкәртә икән. Ғалимдар билдәләүенсә, йомортҡаның составында Омега-6, бер нисә микроэлементтар, B4 витамины бар. Шулай ҙа йомортҡаны күпләп ашарға ярамай, ул ҡанда насар холестеринды күбәйтә, шуға ла йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәренә килтерә.

■ Хроник ҡурҡыу кисереп йәшәгән иргеттәр онкологик сирҙәрҙән ике тапҡыр йышыраҡ үлә, ти Кембридж ғалимдары. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың хәүеф кисереп йәшәүе был сиргә килтермәй икән. Бөгөнгө көндә планетала йәшәүсе өлкән кешеләрҙең 5 проценты даими хәүеф тойғоһо менән йәшәй. Әлегә ғалимдар яман шеш менән невроз араһында бәйләнештең сәбәбен тапмаған, әммә улар гел ҡурҡып йәшәүҙең организмдың иммун системаһын ҡаҡшатыуына ышана. Шуға ла табиптар пациенттарына иғтибарлыраҡ булырға тейеш, ти улар.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

**"Үлән йыя башлағаны бирле бер ҡап та сәй һатып алғаныбыҙ юҡ", - тип башланы һүҙен Аҫылбикә апай Мәжитова. Аптырап киттем: нисек инде ҡара сәйһеҙ? Үҙебеҙҙе белгәндән бирле әбейҙәр һымаҡ сәйхурға әйләнеп бөткәнбеҙ. Һуңғы йылдарҙа хатта сәйҙең тәменән уның төрөн айырыу һәләтенә өлгәшелде. Башҡорт асыҡһа ла - сәй эсә, һыуһаһа ла- сәй эсә, тигәндәре хаҡтыр. Тормошобоҙҙо ошо эсемлекһеҙ күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ шул. Ә бына Аҫылбикә апайҙар ҡара сәйһеҙ көн итеүҙең тәжрибәһе менән дә уртаҡлаша ала. Бәхтиһән, була икән.**

# ҮЛӘН СӘЙЕ БУЛҒАНДА...

## ҡара сәйҙе ситкә ҡуйырға ла була



Өйгә инеп барған ерҙә ялан еҫе генә аңҡып, яңы йыйылған үләндәр ята, ай башында йыйылғандары - бер аҙ һурыҡҡан, уларын баулап киптерергә элгәндәр.

- Был үләндең исеме нисек? Нимәнән файҙалы? - тип һорайым бер зәңгәрһыу ғына төҫтәге сәскәгә иғтибар итеп.

- Ялан ярany. Баш ауырыуынан нығ ярҙам итә.

- Ә быныһы? Беҙҙең ишек алдында ла үҫә...

Аҫылбикә апай артабан һөйләп китә. Мин уны бүлдерергә ҡыймай ғына, ара-тирә һорау бирен ҡуям.

- Етен үләне, бесәй тырнағы тип тә әйтәләр (льнянка обыкновенная). Үҙәк нервылар системаһы аша тәьҫир иткән берҙән-бер эс йомшартҡыс үлән. Ошондай таҙартыу үҙенсәлеге булған күп дарыуҙар, үләндәр, гәҙәттә, эсәклектәге микрофлораны ла боҙа, ашҡаҙанды ялҡынһындыра, ә етен үләне улай түгел.

Һыйырғойроҡ тигән үлән (коровяк), дөрөҫ итеп ҡулланғанда, бауырҙағы яман шеште лә бөтөрөү көсөнә эйә, бик нығ файҙалы үлән.

Йылантамырҙы ла йыл да йыям. Шалфей тип тә йөрөтәләр уны. Ҡатын-ҡыҙҙарға бик тә кәрәкле шифалы үсемлек. Ҡарағусҡыл ҡыҙыл, шәмәхә, ҡуйы алһыу төҫтә сәскә ата. Ана шул сәскәһе хуш еҫ тарата башлағас та йыйылар. Епкә бәйләп, сәскәһен аҫҡа ҡаратып, еләҫ урынға элеп киптерәләр.

Еркәүек, ерек үләне лә тиҙәр быныһын. Тәбиғи аспирин тиҙәр уны. Һаҙамыт ерҙә үҫкәненең еҫе ҡырҡыуыраҡ. Ә ялан ягындағыһы айырыуса файҙалы, еҫе лә икенсе төрлөрәк, йомшағыраҡ һымаҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, ялан ерендә үҫкән үләндәрҙең шифаһы ла күберәк. Кейәү үләнен генә алайыҡ. Тау-ташлы ерҙе ярата ул, сәскә атҡан мәлендә еҫе әллә ҡайҙарға тарала. Өйкөм-өйкөм генә булып үҫә, беҙҙең яҡта (Аҫылбикә апай сығышы менән Хәйбулла районынан - **Авт.**) үҫкәненең сәскәһенең төҫө лә сағыуыраҡ. Уның файҙаһы тураһында һөйләмәһәм дә беләләрҙер.

Ерҙә үҫкән һәр үләндең файҙаһы бар. Бала саҡта уҡ үсемлектәрҙең аталмаларын яҙып, япраҡтарын, сәскәләрен йәбештереп, үҙем өсөн тос ҡына гербарий эшләп алғайным, шул мәғлүмәт тә һеңеп ҡалған аңға. Дарыу өсөн иһә аҙағыраҡ ҡуллана башланым. Тәүгеһе - туҡранбаш. Уның төнәтмәһе баш ауыртҡанда нығ ярҙам итә.

Үләндәрҙе киптергәс, ҡоро быяла банкаларҙа йә сепрәк моҡсайҙа һаҡлайым. Артыҡ киптерергә ярамай, саҡ ҡына дымы ла ҡалырға тейеш. Шөтөрләп кипһә, ыуалып, ҡойолоп бөтә. Яҙғыһын урамда дарыу үләндәренең бәйләмен һатып ултырыусыларға иғтибар иткәнегеҙ барҙыр, ундай бәйләмдәге үләндәрҙең шифаһы әҙ була. Кемдер туңдырғыста ла һаҡлай, әммә ҡайһы бер үләндәр һыуыҡта дауалау үҙенсәлеген юғалта. Мәҫәлән, ҡарағат япрағы. Уны киптергәндә генә С витамины шул килеш тиерлек һаҡлана.

### Үлән йыйыу миҙгеле

- Ҡайһы берҙәрен иртә яҙҙа уҡ йыйылар, ҡайһыларын ҡөҙгөһөн. Сәскәһе өсөн икән - сәскә атҡан мәлдә, ҡоро, аяҙ көндә, гәҙәттә, төшкә тиклем. Орлоҡтары ла файҙалы ҡайһы бер үсемлектәрҙең, уларын инде өлгөргәс, көҙгөһөн йыялар.

Ғөмүмән, үләндәрҙе ҡулланғанда үҙеңдең һиҙемләүеңә таянырға кәрәктер. Ҡайһыныһы һиңә ярҙам итерен кеше эске тойғоһо менән дә белә ала ул. Етди сирлеләргә әҙерләгәндә инде табип менән дә кәңәшләшеү мотлаҡ. Тағы ла шуныһын белеп ҡуйығыҙ: үләнде дауаланыуға ҡарағанда сирҙе иҫкәртеү өсөн ҡулланыу отошлораҡ. Дегәнәк япрағы, аҡтамыр, бәпембә тамыры һәм башҡа шифалы сәй үлән-

МАТУР ХӘТИРӘ

# БАЛА САҠ ЙЫРЫ



**Ҡапҡа төбөндә өс ҡыҙ сөкөрләшә. Өсөһө лә бер төҫтән күлдәк кейгән. Кейерҙәр ҙә, әсәләре ҡулына килеп эләккән һәр тауарҙы шулай күлдәккә әйләндерә беләләр бит улар. Был өс ҡыҙ Лилиә апайым, Гөлфирә апайым менән мин. Ҡаҙ үләне өҫтөнә теҙелешеп ултырғанбыҙ ҙа, атайымды көтәбеҙ. Ул хәҙер ат егеп ҡайтасаҡ. Ҡайҙа ғына йөрөһә лә, беҙҙе үҙе менән алған атайым ваҡыт иркенерәк саҡта дилбегәһен беҙгә тоттороп, күп итеп ялан сәскәләрен йыя. "Сәскәләй матур ҡыҙҙарыма", тип, күҙҙәрен көлдөрөп беҙгә ялан сәскәләрен һонғаны һаман да хәтерҙә.**

Ул йылда нисектер көтөүсе яллап, ауыл һарыҡтарын йәйләүгә алып киттеләр. Һаҡаҫ йылғаһы буйында Митрофан тауы эргәһенә кардон төҙөп, малды шунда ҡыуаланылар. Аҙнаһына бер булһа ла барып, һарыҡтар теүәлме икәнен ҡарап ҡайта инек. Әле лә йәйләүгә барабыҙ тип, атайымды көтөп ултырыуыбыҙ. Икмәк һалынған моҡсай ҙа эргәбеҙҙә, атай Ҡарәсәй шишмәһенә алып барып еткерергә, шәкәрһеҙ ҙә балдай татлы һыуҙы тәмләтергә вәғәҙә иткән.

Атайым колхоздың үҙенә беркеткән атын егеп ҡайтты. Ундай ат колхозда берәү генә булғандыр ул. Кәүҙәгә нығ ҙур, киң күкрәкле, ауыр ҡуйы яллы. Ҡарашы зәһәр ине. Беҙҙең яҡ аттарына оҡшамаған, айырым бер нығлыҡ бар ине унда, баҫҡан урынында бейеп тора. Ҡуҙғалып киткәнендә инде нығ итеп тотоноп ултырырға кәрәк. Был атҡа ҡыҙығыусылар күп ине, тик уны колхоз агрономға беркетеп ҡуйған. Ә атайым - агроном. Халыҡ ул атты ла Агроном тине лә ҡуйҙы. Яҙын егеттәр уны йәшереп кенә һабантуйға әҙерләй ине, атайым быны белһә лә, өндәшмәне, белмәмешкә һалышты - йәш егеттәр хәлен аңламаймы ни? Атайым ҡушҡан исеме иһә Тодес.

***✓ Меңъяпраҡты ла ҡулланабыҙ. Уны борон рустар "солдатская трава" тип йөрөткән, яуҙа йөрөгән һәр һалдаттың кеҫәһендә мотлаҡ кипкән меңъяпраҡ ятырға тейеш булған. Уны ыуалап, яраға һалып, дезинфекциялап, һаҡланғандар.***



> **Белешмә: Аҫылбикә Абдулла ҡыҙы Мәжитова Хәйбулла районы Әбделнасир ауылында тыуып үҫә. Иҫәнгилде ауылы, Сиҙәм ҡасабаһы мәктәптәрендә уҡый, уны тамамлағас, Өфөлә медицина училищеһында белем ала, төп һөнәре - шәфҡәт туташы. Тормош иптәше Риф Урал улы менән дүрт бала тәрбиәләп үҫтергәндәр, биш ейән-ейәнсәргә олатай-өләсәй ҙә улар.**

дәре һәр саҡ ҡул аҫтында булһа, яҡшы. Ҡарағай тубырсығынан, бәпембәнән ҡайнатмалар ҙа эшләп алам, төнәтмәләрен дә тотонам. Яҙғыһын яңы ғына сыҡҡан абағаны тоҙлап, ҡыҙҙырып та ашайбыҙ. Лавр япрағынан май эшләп ҡарарға ла уйлайым әле.

Баҡсамда әҫпе еләген дә үҫтерәм. Уның тураһында мәғлүмәт бик аҙ. Әбит боронғолар уны йыш ҡулланған. Ололарҙың "әҫпеһе ҡалҡҡан" тип һөйләшкәндәрен ишеткәнегеҙ барҙыр әле, аллергия була ул. Быуа ошо әҫпе еләге нәҡ шунан арҙам итә лә инде. Уны ҡулланып, бик күптәрҙең аллергиянан ҡотолғанын беләм.

### Самаһын белһәң...

- Дарыу үләндәре араһында ағыулы булып иҫәпләнгәндәре лә бар, шуға был тәңгәлдә һаҡлыҡ та, сама ла кәрәк. Шәхсән ҡулланғандар араһында сусҡа дегәнәге (дурнушник), монар көпшәһе (болиголов) кеүектәр бар. Ғәҙәттә, уларҙы дауаланыу өсөн төнәтмәләрен берәр тамсылап ҡына башлайҙар, шунан кәрәкле кимәленә еткәс, кире бер тамсыға ҡәҙәр кәметәләр. Яман шеште дауалап, шәбәйгән кешеләр бар, әммә һаҡлыҡ кәрәк.

- Гел генә үлән сәйе эсеү ҡурҡыныс түгелме?

- Кеше уның үҙенә килешкәнен генә һайлай инде. Беҙ ҙә бер үк сәй генә эсмәйбеҙ. Ферментланған боланут (кипрей, иван-чай), еләк, ҡурай еләге япрағы (әйткәндәй, ҡырҙа үҫкән ҡурай еләге япрағы шифалыраҡ), ялан ярағы, йүкә сәскәһе, мәтрүшкә, һары мәтрүшкә, туҡранбаш үләндәренән сәй әҙерләп алабыҙ.

Боланутты йыйғас та, сәскәләрен орлоҡлана торған ҡуҙаҡтарынан айырып алабыҙ ҙа, япраҡтарын ғына нышыпнышып өс литрлыҡ банкаларға һауа ҡалмаҫлыҡ итеп тултырабыҙ. Шунда ултырып быҫлыҡҡас ( армыт еҫе сығып китә унан, төҫө лә ҡара йәшелгә әйләнә), һалма һымаҡ туҡмас таяғы менән "йәйәбеҙ". Еләк, ҡурай еләге япраҡтарын да шулай әҙерләйем. Аҙаҡ кәртә башында еләҫ урында (ҡулайлаштырып алған урыным да бар) киптереп алам да, матурлыҡ өсөн кипкән сәскәләрен аралаштырып, быяла банкаға йә мөксайҙарға һалып ҡуям.

Ҡан баҫымы юғары булғандарға ла игтибарлы булырға кәрәк. Ҡайһы бер үләндәрҙең ҡан баҫымын күтәреү үҙенсәлеге лә бар. Үҙем ҡарағат, сейә япрағы сәйен эсә алмайым, килешмәй. Меңъяпраҡты ла ҡулланабыҙ. Уны борон рустар "солдатская трава" тип йөрөткән, яуҙа йөрөгән һәр һалдаттың кеҫәһендә мотлаҡ кипкән меңъяпраҡ ятырға тейеш булған. Уны ыуалап, яраға һалып, дезинфекциялап, һаҡланғандар.

### Һарысайҙа (сентябрь) әлморон емешен йый

Ҡыҙғылт һары йәки ҡыҙыл һутлы "емештәре" өлгөргәс, гөлйемеш көҙ көнө лә әллә ҡайҙан күренә. Уның емештәре нык үҫешкән сәскә төбөнән барлыҡҡа килгән. Гөлйемештең ысын емештәре - ваҡ ҡына аҡһыл орлоктар. Улар емшәндәрҙән барлыҡҡа килә һәм бокал һымаҡ сәскә төбө эсендә урынлаша. Сәскә төбө эстән ҡаты нырышҡаҡ төксәләр менән ҡапланған, һутлы сәскә төбөндә витаминдар күп була.

Дауалау өсөн гөлйемештен, нигеҙҙә, емеше ҡулланыла. Емешендә төрлө биологик актив матдәләр бар, ул С витаминына бай. Емеште көҙгөнән ҡырау төшкәнгә тиклем йыйлар. Эҫе булмаған мейестә (температура 80-90 градустан артмаһын) йәки махсус киптергестә киптерәләр. Гөлйемеште ҡулланыу ҡышҡы һәм яҙғы айҙарҙа айырыуса файҙалы. Сөнки ошо ваҡытта организм витаминдарға, бигерәк тә С витаминына, нык мохтаж. Гөлйемеш төнәтмәһен (йә ҡайнатмаһын) кешенең ағза-туҡымалары ҡанаусан булғанда (кровоточивость), геморрой менән сирләгәндә, тын алыу юлдары шешкәндә (бронхит, трахеит һ. б.), атеросклероз, үпкә туберкулезы, ашҡаҙан һәм бөйән эсәгенең сей яра (язва) ауырыуы булғанда, дөйөм шешенгәндә, һаулыҡ физик һәм психик яҡтан ҡаҡшағанда, йөклө һәм имеҙгән әсәләргә ҡулланырға кәңәш ителә.

Төнәтмәне әҙерләү: 4 ҡалаҡ киптереп ваҡланған емешен 2 стакан ҡайнар һыуға һалып, өҫтө ябыҡ килеш бер тәүлек торорға кәрәк. Төнәтмәне көнөнә 2 тапҡыр 1/2-1 стакан эсергә. Гөлйемеш үҫемлегенең япрағы һәм тамыры ла шифалы. Гөлйемеш япрағын (кипкәне лә ярай) эҫе һыуҙа йомшартып, экзема кеүек тире ауырыуы сабыртмаһына ҡаплап, 1-2 сәғәткә бәйләп һалырға кәңәш ителә. Төнәтмә һаап, был ауырыуҙарҙан сылатҡыс, ванна яһарға ла мөмкин. Төнәтмәне әҙерләү: 1 ҡалаҡ киптереп ваҡланған япрағын 1 стакан ҡайнар һыуға һалып, өҫтө ябыҡ килеш йыйлы урында 1 сәғәт торорға кәрәк. Халыҡ медицинаһында гөлйемеш тамырынан әҙерләнгән төнәтмә ярҙамында һейҙек ҡыуыҡы һәм бөйәр ташынан ҡотолоу өсөн эсергә кәңәш ителә. Төнәтмәне әҙерләү: 1 ҡалаҡ киптереп ваҡланған тамырын 1 стакан ҡайнар һыуға һалып, өҫтө ябыҡ килеш 2-3 сәғәт торорға кәрәк. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр, ас ҡарынға, 2-3 ҡалаҡ эсергә.

### Һүҙҙе йомғаҡлап...

Дарыу үләндәрен йыйыу ҙур оҫталыҡ һәм белем талап итә, тәртибен, ҡағиҙәләрен дә белеү мотлаҡ. Тәүге шарт - экологик таҙа ерҙән генә йыйырға кәрәк, машиналар күп йөрөгән ерҙә үҫемлектәр газ ултырып ағыуланған була. Ағыулы препараттар ҡулланылған баҫыу эргәһенән йыйыу ҙа тыйыла. Киптергәндә лә үҫемлектәрҙең үҙенсәлегенә игтибар итегеҙ: ҡайһы бер үләндәрҙе - күләгәлә, икенселәрен ҡояшта киптерәләр.

- Хәҙерге медицинаға тулыһынса альтернатива була аламы дарыу үләндәре?

- Замана медицинаһы, минеңсә, күберәк дарыуҙар менән аҡса эшләүгә ҡоролған. Йәнә ул дарыуҙарҙың кире тәьсире лә юҡ түгел. Әлбиттә, күҙ йомоп, тик үләндәр менән генә дауаланыуға күсергә өндәмәйем, шулай ҙа уларҙың тәбиғәттә, аяҡ аҫтында үҫкән серле, шифалы хазина икәнен онотмайыҡ. Киләсәктә кешелек йәйләп шифалы үләндәргә күсер тип тә уйлайым.

**Айгөл АЙЫТҠОЛОВА.**

Фигуралы шыуыуҙа ҡатмарлы элементты аңлата был исем, ат та егеүгә лә, йөк ташыуға ла оҫта. Тик бик өркәк, ҡасандыр айыуҙан ҡасҡан һәм һәр ялпылдаған нәмәне шик аҫтына алып, сабып сығып китергә әҙер генә тора ине.

Ике апайым арбаның бер яғынан ултырҙы, мине атайым үҙе яғына алды. Аяҡтарҙы болғай-болғай тирә-яҡҡа ҡарап барабыҙ. Саң һәм ат тиренә дегет еҫе өҫтәлә. Минең өсөн ул тәмле еҫ кеүек ине. Атайымдың хеҙмәт һөҙөмтәһе - бейек булып үҫкән бойҙай башаҡтары баш ҡоҫорға йыйынған баҫыу буйлап барабыҙ, һабантурғай ошо муллыҡты маҡтапмы маҡтай...

Атайым йыр башлай. Унан беҙ ҡысҡырып йырлайбыҙ. Күмәкләп йырлай торған ятраҡҡан йырыбыҙ ҙа бар:

*Сыуаш ҡыҙы Гөлмария,*
*Арбаны күңелемде.*
*Ғашиҡ уты бер тоҡанғас,*
*Һүнәсәк түгел инде.*
*Мария, Гөлмария,*
*Ғүмерлекҡә һөйгән йәрем Мария...*

Был ваҡытҡа Наҡыҫ йылғаһын кисеүҙән үтә башлағайныҡ. Ҡаршы яр текә генә. Инде шунда менә башлағайныҡ, ҡолаҡты ярып ниҙер шартлап китте. Ат өркөп, кире һыуға һикерҙе, шул ыңғайы ҡамыт бауы шартлап өҙөлдө. Уң тәртә дуғанан ысҡынып, атҡа һуғыла башланы. Атҡа шул ғына етмәй торған, ахыры, саба башланы. Атайым ҡуш ҡуллап дилбегәне тарта, тик ат шашҡандан-шашты, тәгәрмәстәр ергә тейһә тейә, теймәнә - юҡ. Бынан ике йыл алда ғына йөрәгенә операция үткәргән Лилиә апайым осоп төшөп ҡалды. Теге тәртә атты туҡмай ҙа туҡмай, тояҡ аҫтынан тупраҡ, ҡырсын, таштар осоп, өҫтөбөҙгә төшә.

Был хәл нисек көтмәгәндә башланды, шулай уҡ тамамланды. Ат Наҡыҫ буйының туғайына инеп китеп, ике ҙур тал-тирәк араһына ҡыҫылып туктаны. Атайым аттың башынан тотоп, йүгәнен рәтләп нығытты, өҙөлгән бауҙарын кире ялғаны. Ат та йыуашайып ҡалғайны. Шул саҡ Лилиә апайым да килеп етте, ҡом өҫтөнә гөнә төшкән икән, күҙлеге генә ярылғайны. Баҡтиһән, ат алыҫ китмәгән, бер урынды урап сапҡан да сапҡын икән.

Йөйләүгә етеп, һарыҡтарҙы ҡараныҡ та, ҡайтырға сыҡтыҡ. Ҡарәсәй шишмәнен иҫкә лә төшөрмәнек, уның ҡайһыһы ла юҡ ине. Ҡайтҡанда берәү ҙә йырламаны. Был урынһыҙ ине. Хатта ауыҙ асып өндәшә алманыҡ.

**Был йыр Мостай Кәримдең опера өсөн яҙылған "Гөлзифа" тигән либреттоһы булған. Беҙ уны ҡайҙан белгәнбеҙҙер. Атайым өйрәткәндер инде. Ниндәй көйгә йырлағанбыҙҙыр, хәтеремдә түгел. Ә һүҙҙәре һәм аттың беҙҙе нисек алып ҡасыуы - кисәгеләй күҙ алдымда. "Сыуаш ҡыҙы Гөлмария"ны атҡа ултырғанда башҡа йырламаныҡ. Шулай булһа ла, был йыр беҙҙең бала саҡтың иҫтәлеге, гимны булып ҡалды.**

**Фирүзә ХӨСӘЙЕНОВА-ӘБДРӘХИМОВА.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

8 тапҡыр тын алыу - тын сығарыу менән бергә алда яҙылған хәрәкәттәрҙе эшләгәс, 3-5 секунд ял итегеҙ һәм тағы ла 8 тапҡыр ҡабатлағыҙ. Күнегеүҙе эшләү нормаһы - 96 тын алыу - тын сығарыу ваҡытында хәрәкәтләнеү. Әгәр ауыр булмаһа, бер туҡтауһыҙ 16 йәки 32 тапҡыр эшләй алаһығыҙ.

"Дүрт тағанлап насос" күнегеүе үргә тын алыу юлдарын ғына түгел, барлыҡ үпкә туҡымаһын (һауа үпкәгә төпкә төшөп, бил тирәһенә етә) активлаштыра. Был күнекмәлә ҡулбаш та, ҡулдар һәм аяҡтар ҙа, умыртҡаның бил-һигеҙгүҙ өлөшө ҡатнаша. Быуан тыш, ул ҡыҫҡа ваҡытта тын алыуҙың яңы - "арҡаға тын алыу" тип аталған ҡалыбын барлыҡҡа килтерә. Уны теләһә ниндәй, хатта нык ҡаты сир ваҡытында ла, әгәр дүрт тағанлап тора алһағыҙ, эшләргә кәрәк.

Бигерәк тә уны терәк-хәрәкәт аппаратының төрлө боҙолоуына, аяҡ-ҡулдар йәрәхәтләнгәндә (әгәр һеҙҙә бил-һигеҙгүҙ бүлеге остеохондрозы йәки радикулит икән, был күнегеү мотлаҡ кәрәк!) дусар булған сирлеләргә эшләргә тәҡдим итәм. Күнегеү бөйөрҙән төрлө ауырыуҙарына ярҙам итә. Бәүел-енес системаһы ауырыуҙары - простатит, аденома, геморрой булғанда эшләргә кәрәк.

Төп комплекс күнегеүҙәре менән бергә ул ашҡаҙан-эсәк трактына ыңғай йоғонто яһай, ашҡаҙан һуты бүленеп сығыуға ярҙам итеп, аш эшкәртеү процесын яҡшырта һәм эс ҡатыуҙы бөтөрә. Оло йәштәге кешеләргә был күнегеүҙе көнөнә бер нисә тапҡыр эшләү зарур (Стрельникованың тын алыу күнегеүенән һуң эшләһәгеҙ, бигерәк тә яҡшы).

### "Янбаш менән атлау"

Был күнегеү ҡатын-ҡыҙҙарҙың һәм ир-аттың бәүел-енес системаһы сирҙәрен дауалағанда бик һөҙөмтәле. Ҡайһы бер ауырыуҙар, мәҫәлән, үҫмерҙәрҙең орлоҡ юлы веналары киңәйеүе (варикоцеле) ваҡытында бик оҙаҡ бер нинәй билдә һиҙелмәүе мөмкин. Атап әйткәндә, был сирҙе дауалағанда анығ пациенттың анатомик һәм физиологик үҙенсәлектәрен иҫәпкә алырға кәрәк, быны бары тик табип ҡына билдәләй ала. Шуға күрә, бөгөн бәүел-енес системаһын дөйөм нығытыу буйынса кәңәштәр генә бирәбеҙ.

"Янбаш менән атлау" махсус комплекстың башҡа күнегеүҙәре менән бергә простатит, энурез, геморрой, хроник эс ҡатыу ваҡытында ярҙам итә. Бик күп гинекологик сирҙәргә ҡарата һөҙөмтәле.

Шуны билдәләргә кәрәк: ир-аттың иммунитеты уның енси өлкәһе торошона бәйле. Быны Америка ғалимдары күптән раҫлаған. Үҙ тәжрибәмдә миңә балиғ булыу йәшенә еткән егеттәрҙең енси ағзаһы үҫешендә ситкә тайпылыу булыуы башына ла инеп сыҡмаған осраҡтар менән осрашырға тура килде. Урологик комплекстың махсус массаж менән бергә эшләнеүе күп осраҡта бәүел-енес системаһы үҫешендәге анатомик-физиологик тайпылыштарҙы бөтөрөргә ярҙам итә.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



### 23 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 0.05, 3.05 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.30, 3.40 На самом деле. [16+]
19.40 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Знахарь". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Сильная слабая женщина". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Королева бандитов-2". [12+]
3.50 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм.**
**9.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Кольцо Нибелунгов". [16+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.[12+]**
**14.30 Бай бакса. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Ради добра. [6+]**
**18.15, 20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**21.00 По сути дела... [12+]**
**22.00 Реальный футбол. [12+]**
**23.00 Теге өсәү. [12+]**
**23.30 Күстәнәс. [12+]**
**0.00 Т/с "Орлова и Александров". По окончании: Новости (на баш.яз.). [16+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Без вины виноватые". [12+]**
**4.45 "Весело живем". [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 24 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 0.05, 3.05 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.30, 3.40 На самом деле. [16+]
19.40 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Знахарь". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Сильная слабая женщина". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Королева бандитов-2". [12+]
3.50 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 20.45, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Кольцо Нибелунгов". [16+]**
**11.15 Республика Live. #Дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 0.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Дорога к храму. [0+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Реальный футбол. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**21.20 Хоккей. КХЛ. ХК "Спартак" (Москва) - ХК "Салават Юлаев" (Уфа).**
**0.30 Т/с "Орлова и Александров". По окончании: Новости (на баш.яз.). [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Осень". [12+]**
**5.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 25 СЕНТЯБРЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 0.05, 3.05 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.30, 3.40 На самом деле. [16+]
19.40 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Знахарь". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Сильная слабая женщина". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Королева бандитов-2". [12+]
3.50 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Кольцо Нибелунгов". [16+]**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 Бала-саға. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Ты можешь все! [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Историческая среда. [12+]**
**20.45 Честно говоря. [12+]**
**22.00 Реальный футбол. [12+]**
**23.00, 3.45 Ете егет. [12+]**
**23.45 Земляки. [12+]**
**0.00 Т/с "Орлова и Александров". По окончании: Новости (на баш.яз.). [16+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Наследство". [12+]**
**4.30 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 26 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 0.05, 3.05 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.30, 3.40 На самом деле. [16+]
19.40 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Знахарь". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Сильная слабая женщина". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 "Королева бандитов-2". [12+]
3.50 "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 20.45, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Кольцо Нибелунгов". [16+]**
**11.15 Честно говоря. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 0.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Земляки. [12+]**
**14.45 Ради добра. [6+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Республика Live. #Дома. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**21.20 Хоккей. КХЛ. ХК СКА (Санкт-Петербург) - ХК "Салават Юлаев" (Уфа).**
**0.30 Т/с "Орлова и Александров". По окончании: Новости (на баш.яз.). [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Женюсь на своей жене". [12+]**
**4.00 Бай бакса. [12+]**
**4.30 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 27 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.35 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.50 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос 60+". Новый сезон. [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.25 Д/ф Премьера. "Я - Пол Уокер". [16+]
2.15 На самом деле. [16+]
3.15 "Про любовь". [16+]
4.00 "Наедине со всеми". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 "Юморина". [16+]
23.15 Х/ф "Без права на ошибку". [12+]
3.15 Х/ф "Соучастники". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00 Д/ф "Сердце. 40 лет спустя". [12+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00, 17.45, 20.30, 22.00 Интервью. [12+]**
**12.30, 21.00 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00, 3.00 "Весело живем". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Интервью.**
**15.15 Алтын тирмә. [0+]**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Д/ф "Мы - одна семья". [12+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**23.00, 3.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 Земляки. [12+]**
**0.00 Т/с "Орлова и Александров". По окончании: Новости (на баш.яз.). [16+]**
**1.30 Спектакль "Раб божий предполагает". [12+]**
**4.00 Д/ф "Осени золото - весны серебро". [12+]**
**6.00 Д/ф "Хранители". [12+]**

### 28 СЕНТЯБРЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

4.45 Х/ф "Три тополя на Плющихе". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "Табор уходит в небо". [12+]
8.10 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
8.55 Умницы и умники. [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.10 Д/ф Премьера. "Тостуемый пьет до дна". К юбилею Олега Басилашвили. [16+]
11.10, 12.10 Х/ф "Вокзал для двоих". [0+]
12.00 Новости с субтитрами.
14.00 Х/ф Премьера. "Не ждали". [16+]
18.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.30, 21.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
23.00 Х/ф Премьера. "Одаренная". [12+]
0.55 Х/ф "Любовное гнездышко". [12+]
2.30 "На самом деле". [16+]
3.20 "Про любовь". [16+]
4.05 "Наедине со всеми". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.15 "По секрету всему свету".
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Праздничный концерт.
13.45 Х/ф "Сломанные судьбы". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Забывая обо всём". [12+]
1.00 Х/ф "Разбитые сердца". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 Ты можешь. [12+]**
**9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Перекличка". [6+]**
**10.30 Байтус. [6+]**
**10.45 Сыйырсыҡ. [0+]**
**11.00 Күстәнәс. [12+]**
**11.30 Бай бакса. [12+]**
**12.00 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия".**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Д/ф "Башкортостан в сердце моем". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт группы "Бүреләр". [12+]**
**18.15 Деловой Башкортостан. [12+]**
**18.50 Хоккей. КХЛ. ХК "Северсталь" (Череповец) - ХК "Салават Юлаев" (Уфа).**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Посмотрим... [12+]**
**22.30, 1.00 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**0.00 Т/с "Орлова и Александров". По окончании: Новости (на баш.яз.). [16+]**
**1.45 Спектакль "Лавина". [12+]**
**3.15 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**4.15 Башҡорттар. [6+]**
**4.45 Автограф. [12+]**
**6.00 Д/ф "Мы - одна семья". [12+]**

### 29 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.40, 6.10 Х/ф "Без следа". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 "Жизнь других". [12+]
11.15, 12.10 "Видели видео?" [6+]
12.00 Новости с субтитрами.
13.55 Д/ф "Геннадий Хазанов. Без антракта". [16+]
16.10 Д/с Премьера. "Страна Советов. Забытые вожди". [16+]
18.15 "Точь-в-точь". [16+]
21.00 Время.
22.00 Премьера. "Большая игра". [16+]
23.45 Х/ф "Жизнь Пи". [12+]
2.10 На самом деле. [16+]
3.00 "Про любовь". [16+]
3.45 "Наедине со всеми". [16+]

### РОССИЯ 1

4.40 "Сам себе режиссёр".
5.20 Х/ф "Течёт река Волга". [12+]
7.20 "Семейные каникулы".
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Смеяться разрешается.
13.40 Х/ф "Зорко лишь сердце". [12+]
17.50 "Удивительные люди-4". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.00 Д/ф "Второе рождение Поднебесной. Китай глазами советских операторов". [12+]
2.00 Т/с "Ледников". [16+]
3.45 Т/с "Гражданин начальник". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 МузКәрәҙ. [0+]**
**10.15 "Книга сказок". [0+]**
**10.30 "Детей много не бывает". [0+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 Гора новостей. [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Башҡорттар. [6+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30, 4.15 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**17.15 Лидеры региона. [12+]**
**17.45 "Башҡорт йыры" представляет... [12+]**
**18.15 Ете егет. [12+]**
**19.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**19.15 Ты можешь! [12+]**
**19.45 Әлләсе... [6+]**
**20.30 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.00 Республика Live. #Дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 "Байыҡ-2019". [12+]**
**0.15 Т/с "Орлова и Александров". По окончании: Новости (на баш.яз.). [16+]**
**1.15 Спектакль "Салават". [12+]**
**3.15 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**4.45 Автограф. [12+]**

*✓ Ас кешене ашатҡыӊ килһә, уға балыҡ бир. Ас кеше бер ваҡытта ла асыҡмаһын тиһәӊ, ҡулына йылым тоттор.*

*(Генрих Гейне).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БДУ-ның БӨРӨ ФИЛИАЛЫНА - 80 йыл




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**37-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Кейем. Көҫәпәй. Лайыҡ. Бөрәт. Абруй. Елемкәс. Ташбаҡа. Амаяк. Турғай. Тотҡа. Таж. Карта. Алға. Трап. Рәсем. Ҡасҡы. Асҡа. Байрам. Пират. Трамвай. Лапта.

**Вертикаль буйынса:** Тартынҡы. Башваҡкыс. Албаҫты. Ҡөйә. Баттал. Театр. Кеҫәл. Тәпәй. Рәхмәт. Йомағужа. Смета. Мыйыҡ. Йөй. Аса. Карап. Маша. Ярат. Йөк. Армыт.

*ТӨРЛӨ-ТӨРЛӨҺӨ*

## ҒӘСКӘРОВСЫЛАР - ЮЛДА

**Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле коллективтың 80 йыллығына арналған саралар барышында ҙур гастроль турына юллана.**



"Беҙҙе тәүҙә Рәсәйҙең ҙур ҡалалары, һуңынан Башҡортостан буйлап гастролдәр көтә. Ноябрь уртаһында Вьетнам Республикаһына гастролдәр. Киләһе йылдың яҙында һәм йәйендә Ҡытайға, Европаға гастролгә сығабыҙ. Бейеү ансамбле үҙен күрһәтергә тейеш. Милли һәм рус, донъя халыҡтары бейеүҙәрен башҡарған ошондай уникаль коллективтар күп түгел", - тип хәбәр итте ансамбль директоры Алмаз Сәйетов.

80-се ижад миҙгелендә ансамбль Мәскәүҙә һәм Рәсәй ҡалаларында үҙенең концерттары менән сығыш яһай:18 сентябрҙә Мәскәүҙә П.И.Чайковский исемендәге концерт залында сығыш яһап өлгөрҙөләр ҙә инде. 22 сентябрь - Тверь, "Пролетарка" мәҙәниәт йорто; 23 сентябрь - Бөйөк Новгород, Ф.М.Достоевский исемендәге Новгород академия драма театры; 25 сентябрь - Санкт-Петербург, "Октябрьский" ҙур концерт залы; 27 сентябрь - Түбәнге Новгород, Кремль концерт залы.

## ҮҘЕНСӘЛЕКЛЕ МУЗЕЙ

**Башҡортостанда солоҡ умартасылығы музейын булдырырға ниәтләйҙәр. Уны 2021 йылда Өфөлә үтергә тейешле 47-се "Апимондия" халыҡ-ара конгресына әҙерләнеү барышында төҙөү күҙаллана.**



Республиканың Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәгенән хәбәр итеүҙәренсә, "Архтамға" эксперт-проект бюроһы музейҙың проектын әҙерләгән. Архитекторҙар музейҙы яҫы түбәле ҡырағай бал ҡорто солоғо итеп күҙ алдына килтерә. Бинаның тышҡы яғын кәрәҙ рәүешендә эшләү күҙаллана. Туристар музей буйлап бормалы баҫҡыстан йөрөй. Ғилми-тикшеренеү үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин да музейҙың архитектура йәһәтенән үҙенсәлекле булыуын билдәләй. "Кеше бал ҡорто кеүек бәләкәйләнә һәм солоҡ эсендә йөрөгәндә әлеге көндә Башҡортостанда ғына һаҡланып ҡалған умартасылыҡтың боронғо төрө менән таныша..."

Музейҙы Бөрйән бал ҡорто йәшәгән ерҙә - Шүлгәнташ мәмерйәһе, Аҡбулат ауылы янында төҙөүҙәре ихтимал. "Күп кенә илдәрҙең үҙ брендтары бар. Францияла шараптың баш ҡалаһы - Бордо. Французлар уны үҫтереү өсөн 8 ҡатлы шарап музейы төҙөгән. Испанияла Леон эргәһендә шоколад фабрикаһы бар. Беҙҙә бар донъяға билдәле башҡорт балы", - ти Данир Ғәйнуллин. Уның фекеренсә, музейҙың урыны - Өфөлә. 2021 йылда Башҡортостан 47-се "Апимондия" халыҡ-ара умартасылыҡ конгресын ҡабул итә. Республикаға 80 илдән 10 мең самаһы ҡатнашыусы килер тип көтөлә. Быға тиклем Рәсәй Халыҡ-ара умартасылыҡ конгресын бер тапҡыр ғына ҡабул итте - 1971 йылда форум Мәскәүҙә уҙҙы.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һиҗри йыл.*

| Сентябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 23 (24) дүшәмбе | 5:34 | 7:04 | 13:30 | 17:42 | 19:12 | 20:42 |
| 24 (25) шишәмбе | 5:36 | 7:06 | 13:30 | 17:39 | 19:09 | 20:39 |
| 25 (26) шаршамбы | 5:38 | 7:08 | 13:30 | 17:36 | 19:06 | 20:36 |
| 26 (27) кесе йома | 5:40 | 7:10 | 13:30 | 17:34 | 19:04 | 20:34 |
| 27 (28) йома | 5:41 | 7:11 | 13:30 | 17:31 | 19:01 | 20:31 |
| 28 (29) шәмбе | 5:43 | 7:13 | 13:30 | 17:29 | 18:59 | 20:29 |
| 29 (30) йәкшәмбе | 5:45 | 7:15 | 13:30 | 17:26 | 18:56 | 20:26 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ХУЖАБИКӘГӘ*

## ҠЫШҠЫЛЫҠҠА - ҠАУЫН

**2-2,5 кг ҡауын**
**2 стакан шәкәр**
**1 балғалаҡ лимон кислотаһы**
**1 л һыу**



Литрлы банкаға 2 стакан шәкәр һәм 1 балғалаҡ лимон кислотаһы һалабыҙ. Һыу өҫтәйбеҙ ҙә, болғатып, кәстрүлгә ҡуябыҙ. Сиропты ҡайнау хәләнә еткергәнсе утта тотабыҙ.

Ҡауынды таҙартып, турап, стерилләнгән банкаларға тултырабыҙ. Өҫтөнә ҡайнаған сиропты ҡойғас, банкаларҙы һыу ҡайнап ултырған кәстрүлгә ҡуйып, 10 минут тотабыҙ, ҡапҡас менән ябабыҙ.

*✓ Башҡорт телендә ижад иткән журналистарҙың уртаҡ майҙансығы булырға тейеш. Унда шулай уҡ геройҙар, туған телендә һөйләшкән ҡыҙыҡлы спикерҙар, хәл-ваҡиғалар тураһында мәғлүмәт менән бүлешергә мөмкин.*

*ҺҮҘ - ҠӘЛӘМДӘШКӘ*

# ҺӨНӘРЕМ...

## тормошто яҡшыға үҙгәртеү мөмкинлеге



(Башы 11-се һанда).

**▸ Заман менән бергә атлау һәм талап ителгән хеҙмәт булып ҡалыу өсөн башҡорт журналистикаһы нисегерәк булырға тейеш?**

- Ҡыйыуыраҡ булырға тейеш. Бөгөн беҙ абсолют конкурентлы шарттарҙа эшләйбеҙ. Донъя уҡыусы менән тамашасының бармаҡ осонда ғына. Гаджет, компьютер, интернет барыһын да хәл итә кеүек тойола. Әммә журналистика ул интернет биргән мәғлүмәттән айырмалы рәүештә ижади хеҙмәт тә, оло яуаплылыҡ та. Унан килә, журналистика власть менән йәмәғәтселек араһындағы күпер ҙә. Бына ошо күперҙе беҙ ныҡлы, ышаныслы итеп ҡора белергә бурыслы.

Әлеге шарттарҙа гәзит-журналдар ҙа, телеканалдар ҙа глобаль селтәргә яраҡлашырға тырыша. Башҡаса мөмкин дә түгел. Башҡорт журналистикаһы ла яңы мөхиткә күсә бара. Әммә әле беҙгә оперативлыҡ етмәй. Был, минеңсә, рус телле сығанаҡтар нигеҙендә эшләүебеҙгә бәйле. Материалдар йыш ҡына ҡоро тәржемәнән ғибәрәт бит. Беҙгә үҙ контентыбыҙҙы булдырырға ваҡыт. Башҡорт телендә ижад иткән журналистарҙың уртаҡ майҙансығы булырға тейеш. Унда шулай уҡ геройҙар, туған телендә һөйләшкән ҡыҙыҡлы спикерҙар, хәл-ваҡиғалар тураһында мәғлүмәт менән бүлешергә мөмкин. Был беҙҙең эш һөҙөмтәләрендә лә сағылыр ине. Мәҫәлән, бөгөн беҙҙә сәйәси ваҡиғаларға аңлатма, баһа бирерҙәй башҡорт сәйәсмәндәренә ихтыяж бар. Ошондай кешеләрҙе үҙебеҙҙең аранан үҫтереп, күтәреп алырға кәрәк ине. Шәхси амбицияларҙы ситкәрәк ҡуйып торғанда ғына уҡыусыларыбыҙ, тамашасыларыбыҙ йәғни республика халҡының мәнфәғәтен яҡларға мөмкин. Журналист өсөн был төп бурыс.

Баҫма матбуғат хәбәрсеһенән айырмалы рәүештә, телевидение яңылыҡтары тапшырыуы журналистары оператив эш итә. Башҡортостан юлдаш телевидениеһында яңылыҡтар сығарылышы һәр сәғәт һайын эфирҙа. Шунының өсөн ял да, байрамдар ҙа юҡ. Хөрмәтле коллегаларым һәм үҙем дә шәхси ваҡыт менән бөтөнләй иҫәпләшмәйбеҙ, тиерлек. Мәҫәлән, республиканың ниндәй төбәгенән булһа ла командировканан киске тығыҙҙа ҡайтып еткән хәбәрсе мотлаҡ 22 сәғәт 30 минуттағы сығарылышҡа репортаж әҙерләй. Хәбәрсе объектив аша тамашасының күҙенә бағырға һәм үҙ хәбәренә ышандырырға тейешле. Бөтөн был процесс журналистан көсөргәнеш, йыйнаҡлыҡ, аҡыл һәм, әлбиттә, телмәр оҫталығы ла талап итә.

**▸ Туған теленә хеҙмәт итеү журналистың төп бурысымы, нисек уйлайһың?**

- Тел - ул коммуникация сараһы. Уның ярҙамында бәйләнештәр урынлаштырыла, инвестициялар йәлеп ителә. Туған телдә аралашҡан һайын уның бәҫе арта, киңәйә, камиллаша. Беҙгә телебеҙҙең аралашыу даирәһен киңәйтеү мөһим. Шуға ла башҡорт матбуғаты был йәһәттән әүҙемлек күрһәтергә, хатта хеҙмәттәшлек итергә тейештер, тигән фекерҙәмен. Башҡортса комментарий бирерҙәй белгестәрҙе бергәләп эҙләргә, үҫтерергә кәрәк. Мәҫәлән, йыш ҡына теге йәки был мәсьәлә буйынса сәйәсмәндәр ҡарашы талап ителә. Шуға ла башҡорт телендә сәйәси анализ яһарҙай спикерҙар пулын булдырыу шарт, минеңсә. Мәҫәлән, һеҙҙең "Башинформ" агентлығында үткән матбуғат конференцияларында башҡорт телендә һорау биргәнегеҙ бармы? Минең дә юҡ. Ә бит бөгөн журналистар быны башҡара ала. Матбуғат конференцияһында йәки брифингта башҡорт телендә һорау буласағын белгән етәкселәр артабан республиканың ике дәүләт теленә лә ихтирам күрһәтәсәк. Шуға бөгөн милли журналистика әүҙемерәк булырға тейеш.

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА**
**яҙып алды.**

*БАШҠОРТСА ҺҮҘЛЕК*

# ҠАШҠАЛАҠМЫ, ӘЛЛӘ ХОХОҠМЫ?

**Биология фәндәре докторы, БДУ-ның Сибай институты профессоры Сәфәрғәли Йәнтүриндың "Зоология терминдарының русса-башҡортса, башҡортса-русса һүҙлеге"нән Башҡортостанда йыш осраған ҡоштарҙың башҡортса-русса атамалары менән танышығыҙ.**

**Пастушок** - һыу тауығы, тәтелдәгес
**певчий дрозд** - йырсы барҡылдаҡ
**пеганка** - ала сыбар
**пеликан** - берғаҙан
**пеночка-пересмешка** - ирештереүсе төйөт
**пеночка-весничка** - һарыҡош, төйөт
**пеночка-тенбковка** - тәңкелдәк төйөт
**пискулька** - сәңкелдәк ҡаҙ
**пищухи** - сипылдаҡтар
**пересмешка** - әберсә турғайы
**перепел** - бүҙәнә
**погоныш-крошка** -һыу себеш
**погоныш малый** - ҡуҡый, һыу бүҙәнәһе
**подорожник папландский** - юл турғайы
**полевой воробей** - ҡыр турғайы
**полевой жаворонок** - һабан турғайы
**полевой конек** - деүет
**полевой лунь** - баҫыу көйгәнәге
**поручейник** - һаҙ сәпсәүе
**пустельга** - торомтай, сысҡансыҡ
**пустельга степная** - дала торомтайы
**пустельга красная** - ҡыҙыл торомтай
**ремез** - ҡоролдай
**речная крачка** - ҡарабаш өйрәк
**речной сверчок** - йылға сырылдағы
**розовый скворец** - алтынғош
**рябчик** - сел
**савка** - аҡбаш сыпҡай
**садовая горихвостка** - утҡойроҡ
**садовая камышевка** - тал ҡурҙайы
**сапсан** - сапсан, ыласын
**белокрылая крачка** - аҡҡанат сарлаҡ
**серая мухоловка** - себен турғайы
**серая цапля** - күк селән
**свиязь** - ҡашҡалаҡ, хохоҡ
**северный кожанок** - ҡара ярғанат
**серый дятел** - буҙ тумыртҡа
**серая ворона** - ала ҡарға

**(Дауамы. Башы 33-34, 37-се һандарҙа).**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАЛАНЫ МАҠТА,

## ауылда тор

Ҡыҙҙарға - ҡанат, малайҙарға - аяҡ, хужаға - баш, ҡатынға - түш, ҡунаҡҡа - ҡойроҡ майы.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Илай-илай тыуабыҙ, зарлана-зарлана йәшәйбеҙ, донъянан төңөлөп үләбеҙ.

**(Томас Фуллер).**

Зоопарк - кеше булырға өйрәнеү өсөн бынамын тигән урын.

**(Эван Эзер).**

Ас кешене ашатҡың килһә, уға балыҡ бир. Ас кеше бер ваҡытта ла асыҡмаһын тиһәң, ҡулына йылым тоттор.

**(Генрих Гейне).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер бик бай һәм аҡыл эйәһе сауҙагәр ауырып китә. Үҙенең тиҙҙән теге донъяға күсәсәген аңлағас, янына берҙән-бер улын саҡырып ала һәм былай ти: "Улым, миңә был донъяны ҡалдырып, баҡыйлыҡҡа күсергә ваҡыт килеп етте. Һуңғы үтенесем шул: мәйетемде кәфенгә төрә башлағас, хеҙмәтселәргә минең һул аяғыма иҫке башмағымды кейҙерергә бойороҡ бир". Ошо һүҙҙәрҙе әйтә лә, йән бирә сауҙагәр.**

**Уны һуңғы юлға оҙатырға бик күп халыҡ йыйыла. Мәйетте мосолман йолаһы буйынса тәрбиәләп, кәфенгә төрә башлағас, улы бер хеҙмәтсеһенә иҫке башмаҡ тоттора һәм атаһының һул аяғына кейҙерергә бойора. "Был мөмкин түгел, - ти хеҙмәтсе, - беҙҙә ундай йола юҡ!" "Был бит атайымдың һуңғы үтенесе, ул теләгәнсә эшләгеҙ, зинһар..." - ти егет илай-илай. "Мосолман ҡануны буйынса мәйет бары тик кәфенгә төрөлөргә тейеш. Мин был ҡағиҙәне боҙа алмайым", - ти хеҙмәтсе. Егет кеше ни эшләргә лә белмәй, һуңғы үтенесен үтәмәйенсә, атаһының мәйетен зыяратҡа алып китеүҙәрен теләмәй ул. Шунан мәйетте мосолманса ерләү ҡанундарын ныҡлап белгән башҡа кешеләрҙе эҙләтә башлай. Ул кешеләр ҙә мәйеттең аяғына башмаҡ кейҙереүгә ҡаршы була. Шулай итеп, сауҙагәрҙе уның һуңғы үтенесен үтәмәйенсә, әммә бар ҡағиҙәләрҙе күҙәтеп, зыяратҡа алып барып ерләйҙәр.**

**Ҡәбер эргәһендә күҙ йәше түгеп ултырған егеткә атаһының яҡын дуҫы килеп өндәшә һәм уға хат тоттора. Был хатты уға атаһы тере сағында яҙған була: "Улым, мин һиңә бар байлығымды ҡалдырам, уларҙы аҡыл менән тотон, һаранланма, юҡҡа-барға туҙҙырма ла. Мин туплаған байлыҡ һиңә тормошта дөрөҫ юл һайларға ярҙам итһен. Ҡасандыр берәй ваҡыт һин дә минең эргәмә күсерһең - кеше мәңгелек түгел. Шуны хәтереңдә тот: ерҙәге юлың тамамланғас, һин ул тормоштағы бер байлығыңды ла, хатта бер нигә ярамаған иҫке башмаҡтарыңды ла үҙең менән алып китә алмаҫһың..."**


“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
20 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3707
Заказ - 1865/09


«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.